✓Бына яҙҙың фиғеле: нисек сәскәнһең, шулай урып алырһың. Алдаҡ сәсәһең икән - алдаҡ йыяһың. Һаранлыҡ сәсһәң - фәҡирлек йыяһың, ялҡаулыҡ сәсһәң, әлбиттә, киләтең буш буласаҡ. Һинең аңыңа эләккән икеләнеү, ҡурҡыу һәм ышанмаусылыҡ орлоғо шуны уҡ шыттырып бирәсәк.

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

16-22 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2009 ЙЫЛ

№20 (334)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Суска киҙеүе-Хоҙай кисәтеүе**

йәки Кешелек суска итенән ваз кисерме?



2

**Рухландырыр сара...**

рухландырыр Торатауҙа үтте



5

**Мәсет кеүек изге йорттай күреп...**

килһен тамашасы театрға



8-9

**Пионерҙар һыра эсмәне,**

тәмәке лә тартманы...



11

**ТВ программа**

14


# ТУКТА, МӘЛ!



***Бына яҙҙың асылы: ул кеше тырышлығы еп-тәренән үрелгән хәҡиҡәт. Яҙ - ул беҙҙең алға яңы мөмкинлек булып баҫҡан һалҡын, ҡола ялан-ға сығыу. Ошо ҡола яланға сыҡҡас, һин күрше баҫыуҙа Аллаһы Тәғәлә тарафынан, тәбиғәт үҙ вәғәҙәһен үтәй, тиген иҫкәрмә рәүешендә үҫтергән ялан сәскәләрен күрерһең. Ҡара инде йыл миҙгелдәре мөғжизәһенә: беҙ ҡар һыуығынан бөгөлөп төшәбеҙ, ә ул ошо матур үсемлектәрҙе үҙ ҡуйынында һаҡлап тотҡан. Ул сәскәләр һыуыҡҡа һәм елгә зарландымы? Юҡ, әлбиттә. Улар ҡырыҫ шарттарға түҙҙе һәм миҙгел тыуҙырған ҡаршылыҡтарҙы еңә белде. Һин дә, тормошоң сәскә атһын тиһәң, шулай эшләргә тейешһең. Үҫемлектәргә йәшәү мәғәнәһе һәм мөмкинлеге биргән Хоҙай Тәғәлә ошоно уҡ һиңә лә бирәсәк.***



*ИҒТИБАР!*

## "Киске Өфө" сайтына рәхим итегеҙ!

Башҡорт телендәге аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзите интернетта үҙенең сайтын асты: **www.kiskeufa.ru.** Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән таныша, төрлө конкурстары-быҙ тураһында мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Меңәрләгән матбуғат баҫмалары баҙарында үҙ урыны, үҙ йөҙә, үҙ һүҙе менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзитен уҡ-ығыҙ, уның хаҡындағы мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге милләттәштәргә лә еткерегеҙ. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Фәҡәт атай кеше ғаилә башлығы булырға тейеш, тигән фекергә нисек ҡарайһығыҙ?

***Фәнил НУРИЕВ, Республика башҡорт лицей-интернаты директоры:***

-Ғаиләлә башлыҡ бирәү генә була. Ә бына кем башлыҡ булып китә - быныһы инде бөтөнләй икенсе мәсьәлә. Ғаиләлә, ҡағиҙә буларак, ир кеше башлыҡ булырға тейештер. Егет менән ҡыҙ танышып йөрөй башлағанда уҡ билдәләнә буласаҡ ғаилә башлығы. Ҡыҫҡаһы, "ғаилә башлығы" тигән вакантлы урынды ир менән ҡатындың ҡайһыһы көслөрәк, ихтыярлыраҡ - шуныһы яулай. Аҡыллы ҡатын, үҙенең өҫтөнлөгөн белһә лә, ғаилә дилбегәһен иренең ҡулына тоттороға һәм уның һәр бер бөләкәй генә уңышына ла оло баһа ҡуйып, ирҙең күңелен үҫтереп торорға бурыслы. Лидерлыҡ өсөн тартҡылаш барған ғаиләлә бәхет булмай.

***Әҙһәм НИҒМӘТОВ, эшҡыуар:***

-Был - аксиома. Фәҡәт шулай булырға тейеш. Беҙҙең күп кенә бәләләребеҙ атайҙарҙың үҙ ғаиләһендә башлыҡ булыуҙан туктауы, абруйы юғалыуы арҡаһында килеп сыға. Ҡатындар ирҙәрҙән башлыҡ вазифаһын тартып алмай, кереһенсә, ирҙәр үҙ позицияһын юғалтыуы арҡаһында улар ғаилә башлығы булырға мәжбүр күп осраҡта. Совет осоро сәйәсәте ирҙәрҙе шундай хәлгә ҡуйҙы ла инде. Ғаиләгә ир абруйы кире ҡайтмайынса тороп, илебеҙ ҙә абруйлы булмаясаҡ.

***Зимфира МУСИНА, уҡытыусы:***

-Ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар бер ваҡытта ла тиң була алмай. Сөнки уларҙың Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәғәйенләнгән маҡсаты ла төрлөсә. Уларҙы тиң итергә тырышыу ирҙәрҙең ғаиләлә абруйын төшөрөүгә алып килде лә инде, дөрөҫөрәге, был хәл Аллаһы Тәғәләгә ҡаршы килеүгә тиң булды. Ғаилә башлығы буларак, ир үҙ бурыстарын тулыһынса аңлаһын өсөн дин ғаилә тәрбиәһенең айырылғыһыҙ өлөшө булырға тейештер, тип уйлайым. Миненсә, мосолман әҙәбе, Ислам ҡағиҙәләре буйынса ҡоролған ғаилә ғаиләнең идеаль модуле булырға хаҡлылыр.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

*ИҒТИБАР: "КИСКЕ ӨФӨ" - БҮЛӘГЕМ"*

# ЙӘ, КЕМДӘР АҠСАҺЫН...

Бөгөн иң күп гәзит уҡыусылар кемдәр, беләһегеҙме? Әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ауыл кешеләре. Айҙан-айға эш хаҡы алып эшләү бәхете лә бик аҙҙарына ғына тейә уларҙың, ә шулай ҙа гәзиткә яҙылыу мөмкинлеге табалар. "Бына, баҙарға сығарып ҡаймаҡ, эремсек һаттым да, гәзитегеҙгә яҙыла һалып, квитанцияһын һеҙгә ебәрәм", - тип яҙғайны Әлшәй районынан Сәбилә Латипова. Ауылдағы уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бына шулай рухи аҙыҡтан айырылмау яйын таба. Ҡала кешеләре кеүек, аңды томалай, фекерләүҙе үлтерә торған телевизорға, компьютер уйындарына алыштырмаған әле улар гәзитте, китапты.

Нимә әйтергә теләйбеҙме? Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, тыуған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып киләнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтерәнә төшөрәр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр. Әйҙәгеҙ, ҡушылығыҙ ошо "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына. Йә, кемдәр йөрәләмәй 294 һум аҡсаһын? Йә, кем бер тапҡыр ғына бер кило колбаса, йә бер кило кәнфит ашамай тора ала? Акцияға ҡушылыуығыҙ тураһында беҙгә хәбәр итергә онотмағыҙ! Гәзитебеҙҙең индекстары -**50665, 50673** .

## ҺӘМ ТАҒЫ...

**Шундай тәҡдим бар: кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға телә? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә. Ғөмүмән, үҙебеҙҙе шатландыра, кәйефте күтәрә, бәхет нурына ҡойондора торған бәләкәй генә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға, эҙләргә кәрәк, тибеҙ һеҙгә, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Бергә йәшәйек, бергә эҙләйек бәхетле итә торған сараларҙы.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*✓ Был фәнни асыш сусҡа организмында үрсеп, һуңынан кешегә йоғоусы киҙеү вирустарының кеше сәләмәтлеге өсөн уғата хәүефле икәнен раҫларға ерлек бирә.*



ИШАРА

# СУСҠА КИҘЕҮЕ - ХОҘАЙ КИҪӘТЕҮЕ,

## йәки Кешелек сусҡа итенән ваз кисерме?

**Бөгөн барса кешелектең иғтибарын йәлеп итеп, яҡын киләсәк өсөн иң хәүефлеләрҙән һаналған ике донъяуи проблема тураһында белмәгән кеше һирәктер. Уларҙың беренсеһе - киң матбуғат сараларында төп урынды биләгән финанс-иҡтисад көрсөгө булһа, икенсеһе - бер уйламағанда әллә ҡайҙан пайҙә булған сусҡа киҙеүе. Тәү ҡарамаҡҡа, был ике күренеш араһында ниндәй ҙә булһа бәйләнештең булыуы мөмкин түгел һымаҡ. Ана, аҙ ғына элегерәк ҡош киҙеүе тураһында ла әллә күпме шау-шыу булғайны бит. Шулайын шулай ҙа ул, әммә был юлы ниндәйҙер асылып бөтмәгән шөбһәле фекер күңел төбөн маҙаһыҙлап, киҫәтеп торғандай тойола.**

Кемгә нисектер, миңә сусҡа тип аталған хайуани зат организмында яңы киҙеүгә сәбәпсе булған вирустар үрсеүе кешеләргә бынан әллә нисә мең йыл элек ебәрелгән иҫкәртеүҙе хәтерләтә кеүек. Тәүрат-Библияның "Боронғо килешеү" тип аталған өлөшөндә бына ни әйтелгән: "Һәм сусҡа, тояҡтары айырылған булһа ла, көйшәмәй, ул һеҙҙең өсөн таҙа түгел; уның итен ашамағыҙ, үләкһәһенә ҡулығыҙҙы тейҙермәгеҙ". Тимәк, сусҡа итен ашау иудаизм динен тотоусылар менән бер рәттән, христиандар өсөн дә тыйылған ғәмәл икән. Ҡөрьән-Кәрим Тәүраттан байтаҡҡа һуңыраҡ төшөрөлһә лә, унда шулай уҡ мосолманға үләкһә, ҡан һәм сусҡа ите менән туҡланыу тыйыла. Ҡай сағында аптырап та ҡуяһың: боронғоларҙың медицина белеме юҡҡа тиң булған заманда сусҡаның кеше организмы өсөн хәүеф-хәтәр сығанағы булыуын белә алыуы үҙе бер сер кеүек ҡабул ителә. Бындай мәғлүмәттең ниндәйҙер аҡыллы зат тарафынан кешеләргә еткерелеүе тураһында фекер йөрөтмәйсә булмай.

Ғөмүмән, был әшәке хайуандың атамаһы ла күп халыҡтарҙа әр һүҙенә әйләнеп китеүе осраҡлы түгелдер. Эш сусҡаның бысраҡта аунауында йәиһә теләһә ниндәй емтек менән туҡланыуында ғына булһа, бынан әллә ниндәй һығымталар яһап булмаҫ ине. Тәбиғәттә үләкһә ашаусы йыртҡыстар, ҡош-ҡорт бихисап бит. Тимәк, сусҡа итенең кеше өсөн зарарлы булыуы, ошонон менән бәйле тыйыуҙы һанға һуҡмау арҡаһында тотош халыҡтарҙың һәләкәткә дусар булыуы тураһында боронғо кешеләр ҙә мәғлүмәтле булған.

Бөгөнгө медицина фәне сусҡа итен ашауҙы тыйыуҙың нигеҙле булыуын тулыһынса раҫланы. Был хайуандың организмында йөҙәрләгән төрлө бактерия, вирус һәм паразиттар йәшәй һәм үрсей, улар сусҡа итен ашаусыларҙы төрлө ауырыуҙарға дусар итә. Әйтергә кәрәк, сусҡа үҙе лә кешегә хас булған сирҙәрҙе тиҙ йоҡтороусан. Бының берҙәнбер сәбәбе - сусҡаның генетик кодының кеше генетикаһына ярайһы уҡ яҡын булыуында. Боронғо дини риүәйәттәргә ярашлы, Муса бәйғәмбәр заманында ер йөҙөндәге иң әшәке кешеләр Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән сусҡаға әүерелдерелгән, имеш... Бәлки, кешелектең тәү ҡырағайлыҡ дәүерендә каннибализмдың ныҡ таралған булыуы арҡаһында сусҡа итен ашау кеше ашау менән тиңләнеп, билдәле тыйыу барлыҡҡа килгәндер. Нисек кенә булмаһын, сусҡа итен ашауҙы тыйыу заманында кеше аҫраған йорт сусҡалары һанының артыҡ күп булмауына сәбәп булған. Әлбиттә, ҡайҙа сусҡа аҫралмаған, унда "сусҡа сирҙәре" лә кешеләрҙе яфаламаған. Әйткәндәй, заман сиренә әйләнгән "һимереү синдромы" ла башлыса сусҡа итен күп һәм даими ашау менән бәйле түгелме ни? Ғалимдар асыҡлауынса, сусҡа майы күҙәнәктәре кешенең аш һеңдереү юлдарында тарҡалмай ҡалып, "тере" килеш кеше организмының май күҙәнәктере менән тоташа икән. Сусҡанан кешегә күскән күҙәнәктәр артабан энергия сығанағы ла була алмай, йәғни эшкәртелмәй ҡала бара. Шулай булғас, кеше үҙе лә сусҡа кеүек һимермәй, ни эшләһен инде?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, борон да, урта быуаттарҙа ла, хәҙерге осорҙа ла йәшәйеш һабаҡтарын тиҙ онотоу, тәбиғәт һәм йәмғиәт ҡанундарын һанға һуҡмау кеүек алама сифаттар кешелекте артабан имен-аман йәшәй алыу-алмау сигенә ҡаттан-ҡат еткерә килде. Тик әҙәм балалары һаман ошо аянысты хәлдәрҙән үҙенә кәрәкле фәһем ала алмай аҙаплана. Мәҫәлән, кешеләр сусҡа аҫрауҙан бөтөнләйгә ваз кискән булһа, астан үлеп бөтөр инеме ни? Ә меңәр йылдар дауамында сусҡа организмында үрсеп, кешеләргә йоҡҡан сир-сырхауҙан нисә миллион кеше үлгәнен Хоҙай Тәғәлә үҙе генә беләлер.

Ошо фекерҙәремде һеҙгә үҙемдең шик-шөбһәләремде белдереү өсөн генә яҙмайым, һәм был тик минең генә шәхси уйланыуҙарым емеше түгел. Бына әле генә Интернет селтәрендә таратыла башлаған бер мәғлүмәт. Ассошиэйтед Пресс мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, АҠШ Ҡораллы Көстәренең Патология институты ғалимдары Аляскалағы ҡәберлектәрҙең береһендә 1918 йылдан бирле ятҡан эксгумацияланған (ҡаҙып алынған) мәйеттең тән туҡымалары өлгөләрен алып, ғилми тикшеренеү эштәре уҙғарған. Билдәле булыуынса, 1918 йылда бар донъяға таралған "испан" киҙеүенән бөтәһе 20 миллиондан ашыу кеше һәләк булған. АҠШ-та ул саҡта 700 мең кеше ошо киҙеү ҡорбаны була, Аляскалағы һүҙ барған ҡәберлектә лә ошо сирҙән вафат булғандар ерләнгән була.



Хәрби ғалимдарҙы ошо хиҫ китмәле пандемияның бөтә донъя буйлап тиҙ арала таралыу сәбәптәре һәм ошо киҙеүгә ҡаршы вакцина табыу мөмкинлеге ҡыҙыҡһындыра. Һәм ғалимдар сенсацияға тиң фәнни асыш яһауға өлгәшә: әлеге лә баяғы - кәкере шайтан таяғы, тигәндәй, хәҙер инде онотолоп бөткән фажиғә беҙҙең көндәрҙә яманаты сыҡҡан шул уҡ сусҡалар менән бәйле икән дә баһа! Ғилми тикшеренеүҙә ҡатнашҡан доктор Джеффри К. Тобенбергер фекеренсә, 1918 йылғы мәйет туҡымаларынан алынған киҙеү вирусы әле фәнгә билдәле вирус формаларына тап килмәй, әммә уның "сусҡа киҙеүе" тип нарыҡланған вирусҡа туранан-тура мөнәсәбәте булыуы кире ҡаҡҡыһыҙ. Заманында "испан киҙеүе" тип аталһа ла, был вирустың иң тәүҙә сусҡа организмында барлыҡҡа килеүен раҫлау өсөн етерлек дәлилдәр бар. 1957 йылда таралған "Азия" һәм 1968 йылғы "Гонконг" киҙеүе эпидемияларына сәбәп булған вирустарҙың "хужаһы" шулай уҡ сусҡа булыуын инҡар итеп булмай.

Был фәнни асыш сусҡа организмында үрсеп, һуңынан кешегә йоғоусы киҙеү вирустарының кеше сәләмәтлеге өсөн уғата хәүефле икәнен раҫларға ерлек бирә. Күпселек ғалимдар фекеренсә, сусҡа ҡоштар һәм кешеләргә аралашсы ролен үтәп, вирустарҙы ҡоштарҙан үҙ организмы аша кешеләргә күсерә ала. Киҙеү сәбәбе булған мутант вирустарҙың барлыҡҡа килеү механизмы ла артыҡ ҡатмарлы түгел: төрлө ҡоштар организмынан вирустар сусҡаға тиҙ йоға, ә сусҡаның иммун системаһы йоғонтоһонда вирустар мутацияға дусар булып, уларҙың өр-яңы штамдары барлыҡҡа килә. Әлбиттә, ошо процестар барышында кешенең иммун системаһы ҡаршылыҡ күрһәтә алмаған яңы вирустарҙың барлыҡҡа килеүе бик мөмкин. Кем сусҡа аҫрай, кем сусҡа ите менән туҡлана - шулар әлеге яңы вирус ҡорбанына әйләнә лә инде.

**Шулай итеп... Һүҙ башында финанс кризисы һәм сусҡа киҙеүенең тап килеүенә ишара иткәйнем. Матди йәшәйеш өлкәһендә башҡалар иҫәбенә, риба механизмына ҡоролған байлыҡҡа ынтылыу кешеләр араһында ҡомһоҙлоҡ вирусын бер сикләүһеҙ таратып, финанс көрсөгө тип аталған бөтә донъя иҡтисади киҙеүенә алып килде. Бер ниндәй тәбиғәт һәм йәмғиәт ҡанундарын һанға һуҡмаусы "финанс сусҡалары" организмында, йәғни банк һәм кредит ойошмаларында хаттин үҫешкән үҙләштереү инстинкты ҡомһоҙлоҡ вирусының яңынан-яңы штамдарын үрсетеп, кешеләрҙе аҡса ҡолона, әхлаҡһыҙлыҡҡа ҡаршы тора алмаусы ҡулланыусыға, бар тапҡан-эләккәнен ашап бөтөрөп тороусы хайуани затҡа әйләндерә. Иң хәүефлеһе - әҙәм балаларының, үҙҙәре лә һиҙмәйенсә, сусҡаларса йәшәү рәүешенә күнегеп китеүе бар. Күренекле инглиз яҙыусыһы Джордж Оруэлл үҙенең бар донъяла танылыу тапҡан "Мал аҙбары" исемле сатирик әҫәрендә сусҡа-диктатор идара иткән йәмғиәттең ниндәй хәлгә төшәсәген бик асыҡ күрһәтә алған. Ә ысынбарлыҡҡа килгәндә, 1914 йылда ҡупҡан донъя һуғышының сиктән сыҡҡан әхлаҡһыҙлыҡ һәм ҡомһоҙлоҡ касафаты булып, миллиондарса кешенең йәндәре менән түләнгән сусҡа киҙеүе менән тамамланыуын нисек инде Хоҙай киҫәтеүе тип әйтмәҫһең?**

**Вәли ИҘРИСОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Өфөләге ҡайһы бер эре предприятиеларҙа - 1-се троллейбус депоһында, 7-се янғын һүндереү часында булды һәм уларҙың эшмәкәрлеге менән танышты. Мортаза Ғөбәйҙулла улы шулай уҡ Сипайлово биҫтәһендәге ташҡындан һаҡлау дамбаһының беренсе сираты төҙөлөшөн ҡараны. Был дамба Жуков урамынан башлап Тужиловка биҫтәһенә тиклем 4,7 км-ға һуҙыласаҡ. Президент Башҡортостан троллейбус заводында ла булды. Тиҙҙән был предприятиела "КамАЗ" шассийында "НефАз" - TROBUS троллейбустары сығарыла башлаясаҡ.

✓Республикала уҡыусылар, студенттар, аспиранттар, ғалимдар һәм фән эшмәкәрҙәре, эшҡыуарҙар һәм эш биреүселәр ҡатнашлығында Йәштәр фәне көндәре булып үтте. Саралағы иң сағыу мәл - ул "Йәштәр инновациялары салоны" күргәҙмәһе булғандыр. Балаларҙың һәм студенттарҙың ике майҙансыҡты биләгән эштәре йәш быуындың инновацион фекерләү кимәленең сағыу өлгөһө булды. Сарала ҡатнашыусыларҙы Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡотланы.

✓Башҡортостан Республикаһының Милли музейы ойошторолоуға 145 йыл тулды. Юбилей ваҡытында бында 18 быуат тарихын сағылдырған экспозиция залы асылды. Экспозицияла Ырымбур экспедицияһы ғалимдарының уникаль карталары, ул саҡтағы металлургия заводы макеты, башҡорттарҙың рудасылыҡ шөғөлө традицияларын сағылдырған документтар урын алған. 18 майҙа музейҙа асыҡ ишектәр көнө уҙғарыласаҡ.

✓Быйыл Башҡортостанда мәктәпте тамамлаусыларға арналған тантаналар элеккесә 25 майҙа түгел, ә 23 майҙа үтәсәк. Быйыл мәктәпте 29992 уҡыусы тамамлай. Улар барыһы ла мотлаҡ тәртиптә Берҙәм дәүләт имтиханы тапшыраcаҡ.

✓Милли театрҙарҙың "Алтын тирмә" төбәк-ара фестиваленең йомғаҡлау этабы сарала еңгән Ғафури районында үтте. Һуңғы этапҡа ун ете коллектив үткән. Улар араһында Татарстан, Марий Эл, Ырымбур, Силәбе өлкәһенән ҡатнашыусылар ҙа бар.

***✓ 60-70 йәшемдә мин дә Брежнев осорон маҡтап яҙырмын микән, тип уйланам. Нишләптер, берәү ҙә Сталин осороноң сәйәси золом ҡорбандары хаҡында яҙа, һөйләй һалып бармай бит.***



АҘНА ШАҢДАУЫ

# ДЕМЬЯНЮКҠА "КАЮК"!

## Ә башҡаларға?

**Демьянюк тигән фамилияны ишеткәнегеҙ бармы? Юҡмы ни? Һуңғы аҙнала бөтә донъяға яңғыраны бит ул. Америка Ҡушма Штаттарында ла беләләр икән ошо фамилияны йөрөткән кешене. Израилдә, Польшала, Германияла, хатта Украинала ла. Рәсәйҙә лә халыҡ уның хаҡта хәбәрҙарҙыр, тигән уйҙамын. Бик оло икән ул. 89 йәше тулған быйыл. Тимәк, 1920-се йылғы. Ҡайһы берәүҙәр әйтмешләй, ул хәтлем оҙаҡ йәшәмәйҙәр. Әммә уның күп илдәрҙә билдәле булыуы уның оҙаҡ йәшәүе менән генә бәйле түгел. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда Демьянюкҡа 21 йәш була. Ҡорал тотоп һуғышҡа барыр мәл. 1943 йылда иһә Демьянюкҡа 23 йәш тула. Ә 1952-лә - 32 йәш кенә була. Был нишләп Демьянюктың йәшен барлай, тип уйлайһығыҙмы? Был йылдар ул кешенең биографияһындағы үҙенсәлекле маяҡтар булып тора. Әммә улар ғына түгел. Хәйер, ул хаҡта түбәндәрәк.**

Шулай итеп, 1941 йылда Демьянюк Совет Армияһы сафтарына алына һәм ҡулына ҡорал тотоп фронтҡа китә. Ике йыл үткәс, 1943 йылда, уға үҙенсәлекле бер танытма бирелә. Юҡ, юҡ, Совет армияһы һалдаты йәки офицеры кенәгәһе түгел, ә Польшалағы Собибор концлагерындағы махсус СС төркөмөнөң хеҙмәткәре - вахманы танытмаһы тотторола уға. 32 йәшендә иһә Иван Демьянюк Америка Ҡушма Штаттарында төйәкләнә. Оҙаҡҡа һуҙмай ғына АҠШ гражданлығына эйә була. Ә үткән аҙнала иһә ул АҠШ-тан Германияға һөрөлдө. Махсус самолетта - врач, шәфҡәт туташы һәм Америка хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре оҙатыуында. Күптән көтөлгән хөрмәтле ҡунаҡмы ни? Юҡ шул. Хәрби енәйәтсе. Әле ул Мюнхен ҡалаһында урынлашҡан төрмәнең лазаретында. Хәҙер Германия суд медицинаһы хеҙмәткәрҙәре Демьянюктың яҙмышын хәл итергә тейеш. Улар был ҡарттың суд ултырыштарында ҡатнашырлыҡ хәле бар, тигән ҡарар сығарһа, Демьянюк хөкөмгә дусар ителәсәк. Юҡ икән, тимәк, юҡ. Йығылғанды типкеләмәйбеҙ, йәғни. Шуны ла онотмағыҙ, Демьянюкҡа 89 йәш. Ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенсә, ул лейкемия, ревматизм, бауыр ауырыуҙары менән яфалана. Шуға ҡарамаҫтан, Германия суды уны хөкөмгә тарттырмаҡсы. 70 йыл элек башҡарылған енәйәттәре өсөн.

Кем булған һуң ул Иван Демьянюк, тиерһегеҙ. Бер аяғы менән теге донъяла булған ҡарт кешене даръя аша йөрөтөп хөкөмгә тарттырыуҙың ни хәжәте бар, тип уйлауығыҙ ҙа ихтимал. Һеҙҙең менән тулыһынса килешәм. Америка Ҡушма Штаттары менән Германияның туҡһанға еткән бабай менән булышыуҙарын, был хаҡта бар донъяға яр һалыуҙарын ҡапыл ғына аңлап та булмай. Мәғәнәһеҙ бер эш менән шөғөлләнәләр кеүек улар. Баш-ҡа эштәре лә юҡ һымаҡ.

Иван Демьянюктың Собибор концлагерындағы ҡушаматы "Иван Грозный" булған, имеш. Илебеҙ тарихындағы был тиран батша хаҡында, моғайын, беләһегеҙҙер. Һис юғында "Иван Грозный үҙ улын үлтерә" тигән рәсемдән булһа ла. Әле Рәсәй телевидениеһы уның тураһында телесериал күрһәтә башланы, мәҫәлән. Демьянюк - "Грозный" үҙ "аҙашы"нан күпкә арттырып ебәргән булған. Шаһиттарҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, ул концлагерҙың надзирателе булараҡ, халыҡты төрлөсә язалауҙан, ыҙалатыуҙан, йәберләүҙән һәм мыҫҡыллауҙан айырым бер ләззәт алған. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың түштәрен ҡырҡып алыуҙан ниндәйҙер тәм тапҡан, башҡаларҙы ҡаратып ҡуйып, йәш ҡыҙ балаларҙы көсләүҙән тартынмаған. Ә шулай ҙа төп "эше" - йәһүдтәрҙе асыҡлауҙан, уларҙы айырып алып, үлем язаһына тарттырыуҙан ғибәрәт булған, имеш. Кешене теге донъяға оҙатыу өсөн Иван Демьянюктың "йәһүд" тип бармаҡ төртөп күрһәтеүе генә еткән булған. Шулайтып бармағы менән төртөп кенә 29 мең кешенең башына еткән дәһшәтле Демьянюк.

Замана бизмәндәренә һалһаң, 29 мең һан да түгел инде. Бәләкәс кенә бер ҡала. Ундай ҡаласыҡтарҙы беҙҙекеләр Афғанстанда йәки Чечняла, мәҫәлән, ер менән иҫәпһеҙ-һанһыҙ тигеҙләне. Берәү ҙә бер нәмә лә уйламаны ла хатта.

Быға тиклем нишләп тапмағандар ҙа, яуаплылыҡҡа нишләп тарттырмағандар икән уны, тигән һорау тыуыр, моғайын. Тапҡандар икән шул. Тапҡандар һәм тотҡандар. 21 йыл элек үк. Йәғни, 1988 йылда. Шаһиттар ҙа табылған. Улар Демьянюкты танып ҡына ҡалмаған, ул ҡылған енәйәттәр хаҡында ентекләп һөйләп тә биргән. Уны аҫып ҡуйырлыҡ ҡына дәлилдәр тупланған булған. Әммә ҡайҙандыр яңы шаһиттар килеп сыҡҡан. Улар Иван Демьянюк менән "Иван Грозный"ҙың бер үк кеше булыуына шик белдергән. 1993 йылда Израилдең Юғары Суды Демьянюкҡа ҡарата ҡабул ителгән үлем язаһы тураһындағы ҡарарҙы ғәмәлдән сығара. Ғәжәпме? Иҫ киткес!

Ошо уңай менән илебеҙ тарихынан бер генә миҫал килтермәксемен. Билдәле маньяк-үлтереүсе Чикатилоны эҙләгән осорҙа бер нисә кешене (берәүҙе генә түгел, шуға иғтибар итегеҙ!) ул ҡылған енәйәттәрҙә ғәйепләп, төрмәгә бикләйҙәр. Бер бахыры шунда вафат була. Ә ҡалғандары, Чикатило ҡулға алынғас та, оҙаҡ ҡына ваҡыт азатлыҡҡа ирешә алмай аҙаплана. Быныһы һүҙ араһында ғына.

Әммә быны менән генә "Демьянюк эше" тамамланмай әле. 2004 йылда Америка Ҡушма Штаттарында уның үткәндәрен асыҡлау эше ҡабаттан тергеҙелә. Һәм һөҙөмтәлә ул АҠШ гражданлығынан мәхрүм ителә. Шуға ҡарамаҫтан, Демьянюк Америка биләмәләрендә йәшәүен дауам итә. Асылда ул берәүгә лә кәрәкмәй булып сыға - тыуған иле Украинаға ла, енәйәттәр ҡылған урыны Польшаға ла.

Ниһайәт, 2008 йылда Германияның Людвигсбург ҡалаһы прокурорҙары эш буйынса Израилдә булғанда Демьянюктың "аусвайс"ына юлыға. Был документта Демьянюктың фотоһы, ҡултамғаһы, айырым билдәләре тураһында мәғлүмәттәр күрһәтелгән була. Немецтар, хатта улар фашистар булһа ла, бигерәк нөғәйт булған шул. Ошо факттар уға ҡаршы АҠШ-тан экстрадициялау (йәғни, ҡыуып сығарыу) һәм Германияла суд процесын башлау мөмкинлеген бирә лә инде.

Нисектер, Демьянюктың эше тейешле кимәлдә ҡаралып, ул ҡылған енәйәттәр, хатта етмеш йылдан һуң булһа ла, үҙ баһаһын алырына, был фашист яуаплылыҡҡа тарттырылырына һәм аҙаҡҡы ғүмерен төрмәлә үткәреренә ышанам. Ышаныһым сит илдәрҙең, шул уҡ Германияның йәки АҠШ-тың хөкөм итеү системаһына түгел, ә ундағы йәмғиәттең үҫешендә.

Эш Демьянюкта түгел. Дөрөҫөрәге, унда ғына түгел. Кешелеккә ҡаршы енәйәт ҡылғандар, ғәйепһеҙ халыҡты - ҡарт-ҡороно, бала-сағаны, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡырғандар, һуйғандар, мыҫҡыллағандар күп әле. Концлагерҙар бит Германияла ғына булмаған. Уларҙы тәүҙә, һуғышҡа тиклем үк, беҙҙә, Советтар Союзында төҙөй башлайҙар. Беломор каналы, мәҫәлән, тулыһынса сәйәси золом ҡорбандарының һөйәктәрендә төҙөлгән. Алыҫ Көнсығышта, Себерҙә, илебеҙҙең төньяҡ сиктәрендә, Магаданда һәм Воркутала, Уралда, Комиҙа - лагерҙар һәр бер төбәктә булған. Уны "ЗК"-лар үҙҙәре үк төҙөгән, сәнскеле тимерсыбыҡ менән үҙҙәре үк ураҡан, һаҡсылар өсөн вышкаларҙы үҙҙәре үк күтәреп ҡуйған. Һәм шул лагерҙарҙа бар халыҡ - кулактар һәм милләтселәр, ҡороҡостар һәм синфи дошмандар, сит ил шпиондары һәм дин әһелдәре, карателдәр һәм репатрианттар һәм тағы ла уларҙың ғаилә ағзалары - бөтәһе лә Демьянюк кеүек надзирателдәрҙән ыҙа сиккән. Кем улар? Ҡайҙа улар? Кем белә? Берәү ҙә белмәй. Улар берәүгә лә кәрәкмәй. Үткәндәрҙең саңын ҡаҡма, тиҙәр миңә. Шул уҡ ваҡытта Сталин тураһында, уны "ил һәм халыҡтар атаһы", "фәрештә" итеп күрһәткән мәҡәләләр донъя күреп тора. Уларҙы эҙләп әллә ҡайҙа, алыҫҡа барырға кәрәкмәй. Миндә 2007 һәм 2008 йылдарҙа сығарылған бер түгел, ике брошюра ята. Ике автор ҙа ихтирамлы кешеләр. Берәүһе тураһында ла бер генә лә яманатлы һүҙ әйтә алмайым. Шулай ҙа уларҙың ҡабаттан Сталин "әләмен" күтәрергә сығырырға, уны яҡларға, ул эйәрсендәре менән берлектә ҡылған енәйәттәрен аҡларға маташыуҙарын аңламайым. Үҙемдә соҡонам. 60-70 йәшемдә мин дә Брежнев осорон маҡтап яҙырмын микән, тип уйланам. Нишләптер, берәү ҙә Сталин осороноң сәйәси золом ҡорбандары хаҡында яҙа, һөйләй һалып бармай бит. Яҙыусылар, шағирҙар, сәйәси әһелдәр, ғөмүмән, билдәле шәхестәр тураһында ғына түгел. Зәки Вәлиди ғәскәрҙәрендә һуғышҡаны, йәғни "башҡорт милләтсеһе", кулак, йәғни етеш тормош көткән кеше, мулла йәғни дин әһеле йәки уларҙың ғаилә ағзаһы булғаны өсөн генә түгел, бер нисә башаҡ, бер ус бойҙай, йәки ҡосаҡ бесән өсөн 25-әр йыл Сталин лагерҙарында үткәргән кешеләр хаҡында, йәғни күршеләребеҙ, ауылдаштарыбыҙ, яҡташтарыбыҙ тураһында белергә, һөйләргә, яҙырға кәрәк. Уларҙың хәтерҙәрендә Демьянюк ишеләр нығыраҡ һаҡланғандыр, моғайын.

50-60-70 йыл элек булған ваҡиғалар бөгөн кемгә кәрәк һуң, тигән һорау тыуыуы ихтимал. Тыныс киләсәгебеҙҙе тәьмин итер өсөн, үткәндәр ҡабатланмаһын өсөн. Юғиһә, йәмғиәтебеҙҙең бөгөнгө таркау хәле сталинизмдан да ҡырҡыураҡ һәм аяуһыҙыраҡ режимды власҡа килтереren көт тә тор.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты "Салауат Юлаев" клубы һәм Рәсәйҙең йыйылма командаһы хоккейсыларын хоккей буйынса донъя чемпионатында еңеү менән ҡотланы.

✓ Рәсәй Хөкүмәте "Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге тураһында техник регламент" раҫланы. Көйләнә торған номенклатураға имеҙлек һәм уйынсыҡтар, өҫ һәм аяҡ кейемдәре, ҡәләм һәм ҡағыҙ, балалар арбаһы, велосипедтар һәм башҡалар инә. Был продукциялар химик, биологик, механик, янғын, электрик һәм термик хәүефһеҙлек күрһәткестәренә яуап бирергә тейеш.

✓ БР Ҡатын-ҡыҙҙар союзы республикабыҙ ҡатын-ҡыҙҙарына сетерекле хәлдәрҙән сығыуҙа ярҙам итә, йыш ҡына шәхси ҡабул итеү көндәре ойоштора. Союзға 251-64-39 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓ Быйыл тәүге кварталда республикала химик этиологиялы ағыуланыуҙар менән 1308 осраҡ теркәлгән. Үткер ағыуланыуҙар структураһында спиртлы эсемлектәр менән ағыуланыуҙар 43,7 процент тәшкил итә. 12 осраҡта спиртлы эсемлектәр менән балалар ағыуланған. Быйыл тәүге кварталда ошондай ағыуланыуҙарҙан 201 кеше үлгән. Уларҙың 27,9 проценты - спиртлы эсемлектәрҙән, 24,4 проценты - наркотиктарҙан, биш проценты дарыуҙан ағыуланыу сәбәпле донъянан киткән.

✓ Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһына бәләкәй ауырлыҡта тыуған балаларҙы тәрбиәләү өсөн тәғәйенләнгән яңы ҡоролма һатып алынды. Был дауаханаға ҡатын-ҡыҙҙар башлыса патологиялы йөкләлөк менән килә. Акушерлыҡ бүлексәһендә тыуған һәр унынсы бала - ваҡыты етмәйенсә, һәр бишенсеһе - интенсив терапия дауалауына мохтаж булып тыуа. Яңы ҡоролма яңы тыуған балалар үлемен ике тапҡырға кәметәсәк, ти табиптар.

✓ Хоккей буйынса Рәсәй йыйылма командаһы тренерҙары Вячеслав Быков һәм Игорь Захаркин "Салауат Юлаев" хоккей клубы менән ике йылға контракт төҙөнө. Рәсәй хоккейсыларын ике йыл рәттән донъя чемпионы кимәленә күтәргән данлыҡлы тренерҙар тандемы Башҡортостан хоккей командаһын да яңынан ил чемпионы итә алыуға иҫәп тота.

*✓ Хәҙер ике-өс эштә, алһыҙ-ялһыҙ эшләргә лә тура килеүе бар, - ти ғаилә башлығы. Әҙ тәьмин ителгәндәрҙең нәфсеһе ҙур түгел, улар һәр ваҡыт сығымдарын максималь кимәлдә ҡыҫып йәшәүгә күнеккән...*



ҮӘТ ӘЙ!

# АВТОГРАЖДАНКА ХАҠЫ КҮПМЕ?

**Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең "Транспорт саралары хужаларына гражданлыҡ яуаплылығын мотлаҡ рәүештә страховкалау буйынса страховка тарифтарына, уларҙың структураларына һәм страховка премияларын билдәләү тәртибенә үҙгәртеүҙәр индереү тураһында"ғы Ҡарары 2009 йылдың 25 мартында үҙ көсөнә инде. Автогражданлыҡ яуаплылығын мотлаҡ рәүештә страховкалау (ОСАГО) полисына тарифтарҙың үҙгәреүе тураһында күптән һүҙ ҡуҙғатылһа ла, бик күп автоһөүәҫкәрҙәр өсөн страховка хаҡының артыуы көтөлмәгән хәл булып торҙо. Шулай итеп, яңы полис артынан барғанда нимәгә әҙер булырға?**

Беренсенән, базовый тариф үҙгәрешһеҙ ҡалды, ул еңел автомобиле булған граждандар өсөн элеккесә 1980 һум тәшкил итә. Әлегә тәғәйен водитель өсөн страховка полисы хаҡын билдәләгән ваҡытта иҫәпкә алынған коэффициенттарға үҙгәрештәр индерелде. Автомобиль хужаларының ҡайһы бер категориялары өсөн полис хаҡы ике тапҡырға тиерлек артты. Двигателе бәләкәй кубатуралы булған һәм ҡеүәте 50-нән алып 70-кә тиклем ат көсө тәшкил иткән бик күп автомобиль төрҙәре өсөн ОСАГО полисын иҫәпләү нәүбәте 0,7-нән алып 0,6-ға тиклем, ә ҡеүәте 50-нән аҙыраҡ ат көсө тәшкил иткән автомобиль өсөн был коэффициент 0,5-тән алып 0,6-ға тиклем артты. Ә бына "ат көсө" һаны йөҙҙән артҡан машина хужалары өсөн, киреһенсә, был күрһәткес ноль бөтөн үндан бергә кәмене.

Статистика буйынса, аҙ тәжрибәле водителдәр күберәк аварияләр яһай. Был үҙгәрештәрҙә водителдәрҙең "тәжрибәлек планкаһы"н ике йылдан өс йылға тиклем арттырыу ҡаралған. 22 йәште уҙмаған һәм өс йыл йөрөтөү стажы булған водителдәр өсөн коэффициент 1,3-тән 1,7-гә тиклем, өлкәнерәк йәштәге "яңы" водителдәр өсөн - 1,2-нән алып 1,5-кә тиклем артты. Йәш, әммә тәжрибәле (руль артында өс йылдан артыҡ ултырған) водителдәр өсөн был күрһәткес 1,15-тән алып 1,3-кә тиклем үҙгәрҙе. Тағы ла иҫәпһеҙ-һанһыҙ водителдәргә автомобиль менән идара итергә рөхсәт итеүсе полис өсөн коэффициент та артты, уның һаны хәҙер элекке 1,5 урынына 1,7-не тәшкил итә.

Шулай уҡ ОСАГО полистары буйынса территориаль коэффициенттар ҙа яңынан ҡаралды. Хәҙер минималь коэффициент 0,55-те тәшкил итәсәк. Беҙҙең республиканың РФ Хөкүмәтенең юғарыла күрһәтеп үтелгән ҡарарында һанап үтелгән ҡалаларында ғәмәлдә булған коэффициенттар үҙгәрешһеҙ ҡалды. Өфөлә, мәҫәлән, территориаль коэффициент элеккесә 1,3-тө тәшкил итә. Әммә Башҡортостандың бүтән ҡала һәм райондары өсөн был күрһәткес 1,5 тапҡырға артты. Әгәр элек минималь территориаль коэффициент 0,5 булһа, хәҙер ул - 0,75.

Шулай итеп, күпселек автомобиль хужалары өсөн ОСАГО полисы ҡиммәтләнәсәк. Бындай саралар ыңғай һөҙөмтәләр ҙә килтерер һәм судтарҙа страховка компаниялары түләүҙәренә ризаһыҙлыҡ белдереүсе граждандар сираты кәмер, тип өмөтләнергә ҡала.

**Владислав ЖИРНОВ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Был арала баш ҡаланың фатирһыҙ интеккән кешеләре араһында йәнле ығы-зығы бара. Башҡортостан Республикаһында "Үҙ йортом" тигән аҙ ҡатлы торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү программаһы старт алды. Әҙ тәьмин ителеүселәр иҫәбенә ингән һәм фатир алыуға сиратта торған тәүге 50 кеше Шамонино ауылында шәхси йортҡа сертификат алды ла инде. Рәсәйҙең башҡа бер төбәгендә лә булмаған программа буйынса киләһе биш йылда бюджет хеҙмәткәрҙәре өсөн барлығы 5 мең йорт төҙөләсәк.**

# АЛҺЫҘ-ЯЛҺЫҘ ЭШЛӘ...

## әммә йортло булыу кәрәк

Шарттар шундай: йорт төҙөү өсөн 10-12 сотый ер участкаһы бушлай бирелә. Төҙөлөш хаҡы йорттоң ҙурлығына һәм ниндәй материалға өҫтөнлөк биреүеңә ҡарай. Яҡынса ул 500-700 мең һумға төшәсәк. Дәүләт 300 мең һумғаса 8 процент менән биш йылға кредит бирә. Программала ҡатнашыусылар инженер селтәрҙәре (электр, газ, һыу үткәргес, юл) өсөн түләмәй, ул сығымдарҙы республика бюджеты ҡаплаясаҡ. Ә бына инженер селтәрҙәрен йорт эсенә индереү - хужаның үҙ иҫәбенә башҡарыла. Йорттар хужаның теләге буйынса шлакоблоктан, кирбестән, брустан йә бүрәнәнән һалына. Уларҙың майҙаны 54-тән 100 кв. метрға тиклем буласаҡ.



Хәҙер был осраҡты программала ҡатнашҡан бер уҡытыусылар ғаиләһе миҫалында ҡарайыҡ. Ғаилә башлығы ҡулға 10500, ҡатыны 9500 һум ала. Айлыҡ бюджет 20000 тәшкил итә. Быға тиклем дөйөм ятаҡта 18 квадрат метр майҙанда йәшәгәндәр. Фатир алыуға сиратта торғандар. Программа тураһында ишеткәс тә унда ҡатнашырға ҡуш ҡуллап риза булғандар. Ер бушлай, ләкин йорт төҙөүгә бер нисә менде өҫтәп түләргә кәрәк, тигәс, улар был бер нисә менде һанай башлаған. Иң арзан йорт 500 мең тора тигәстәр, ошо вариантта туҡталғандар. Ғаилә башлығына беренсе бурыс: аҡса табырға кәрәк. Бай туғандар юҡ. Дуҫтар, таныштар ҙа ул тиклем аҡса биреп тора алмай. Ниңә аҡса алдан йыймағанмы? Эш хаҡы ашау-кейенеүгә саҡ еткәндә, ҡайҙан йыяһың? Шулай ҙа тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан - табырҙар. Бәлки, банктан кредит алыу мөмкин булыр. Иң мөһиме, йортҡа сертификат алынды. Ғорурланып: "Минең өйөм!", - тип әйтерлек йорттары буласаҡ. "Хәҙер ике-өс эштә, алһыҙ-ялһыҙ эшләргә лә тура килеүе бар, - ти ғаилә башлығы. - Биш йыл тирәһе ҡыйын буласаҡ, һуңынан әҙерәк еңеләйер. Әҙ тәьмин ителгәндәрҙең нәфсеһе ҙур түгел, улар һәр ваҡыт сығымдарын максималь кимәлдә ҡыҫып йәшәүгә күнеккән..."

**Бына шулай фекер йөрөтә Рәсәйҙең бер төбәгендә лә булмаған уникаль программала ҡатнашыусы ғаилә башлығы. Бына ошолай фекер йөрөткәндәр, әлбиттә, бар ҡыйынлыҡты ла еңәсәк, йортло ла буласаҡ. Ә икеләнгәндәр... Улар икеләнеп ултырып, ҡулға килеп эләккән бәхетле осраҡты ысҡындырып ҡуйыуы ла бик ихтимал. "Хәл итергә теләгән юлын эҙләр, икеләнгәндәр сәбәп эҙләр", тиҙәр бит.**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

УФ!

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: ТАЛПАН!

**Талпан яҙын һәм йәйен бигерәк тә аяуһыҙ була. Урманға йәки паркка сығыуың була, ул шунда уҡ һиңә ҡаҙалырға ла өлгөрә. Ул талпан энцефалиты вирусын йөрөтөүсе һәм һаҡлаусы бөжәк булып тора.**

Талпан энцефалитын йоҡтороусы кеше шунда уҡ ауырый башламай, сир таралыу ваҡыты ете көндән алып ун дүрт көнгә тиклем, ҡайһы саҡта өс көндән алып егерме бер көнгә тиклем тәшкил итә. Ауырыу киҫкен башлана, юғары температура, баш ауыртыуы, ҡоҫоу, бөтә тән һыҙлауы, аң томаланыуы күҙәтелә, тән тартышыу, фалиж барлыҡҡа килеүе мөмкин.

Тәнгә ҡаҙалған талпанды еп менән уратып алырға йәки марля, эҫкәк, пинцет менән тартып алырға кәрәк. Ҡаҙалған урынға спирт, водород перекисы йәки йод төнәтмәһе һөртөгөҙ. Талпан ҡалдыҡтарын ташларға ярамай, уны тикшереү өсөн лабораторияға тапшырыу яҡшыраҡ булыр.

Урманға барыр алдынан ошондай кәңәштәрҙе иҫегеҙҙә тотоғоҙ: асыҡ бер төҫтәге кейем кейегеҙ - унда талпанды күреү еңелерәк. Күлдәктәрегеҙҙе - салбарҙарға, ә салбар балаҡтарын носкиға йәки тығыҙ итек ҡуныстарына тығып ҡуйығыҙ. Замок менән ябылған күлдәк һәм салбарҙар кейеү яҡшыраҡ. Башығыҙға капюшон йәки ҡалын яулыҡ ябынығыҙ. Һәр ун-ун биш минут һайын өҫтөгөҙҙө ҡараштырып тороғоҙ. Талпан шунда уҡ ҡаҙалмай, кейемгә йәбешеп алғас, үҙенә яйлы урын эҙләп, һәр ваҡыт өҫкә үрмәләй. Урманда туҡталыу йәки йоҡлап ҡалыу өсөн оҙон үлән үҫмәгән урын һайлағыҙ. Күҙәтеүҙәр буйынса, талпан бер ваҡытта ла ағастан башҡа төшмәй һәм бер метрҙан артыҡ бейеклеккә күтәрелмәй.

Талпандарҙы ҡурҡытыусы һәм үлтереүсе аэрозоль һәм ҡәләмдәр ҡулланығыҙ. Уларҙы сикәгә, тубыҡҡа, янбашҡа, билгә, ҡул суҡтарына һәм мотлаҡ рәүештә елкә тирәһенә һөртөп сығыу кәңәш ителә. Ялан сәскәләрен шунда уҡ өйгә индермәгеҙ, уларҙы бер ни тиклем ҡояшлы урында ҡалдырығыҙ, талпандар тура төшкән ҡояш нурҙарын яратмай.



**Шулай итеп...**

**Талпан ҡаҙала ҡалһа, уны тартып алғас, быяла һауытҡа һалып, баш ҡаланың Шәфиев урамы 7-се йортта урынлашҡан (103-сө бүлмә) вирусология лабораторияһына алып барығыҙ. Тикшереү түләүле - 220 һум. Иртәнге сәғәт 9-ҙан 16 сәғәткә тиклем мөрәжәғәт итергә була. Телефон: 237-58-40.**

**Зөһрә МУСИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә ҡала халҡының һыу эргәләрендәге ялын ойоштороу буйынса ҡарар ҡабул ителде. Был ял 1 июндән 31 августҡа тиклем билдәләнгән. Ҡарар сиктәрендә баш ҡаланың "Солнечный" һәм "Ҡашҡаҙан" ҡала пляждарында ла сезонға әҙерлек бара.

✓Өфөнөң көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү селтәре быйыл тәүге кварталда ғына ла 13 яңы предприятие һәм шәхси эшҡыуарҙар менән тулыланды. Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә хәбәр ителде. Бөгөн баш ҡала биләмәһендә барлығы 2137 предприятие көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү менән шөғөлләнә. Улар араһында автосервистар ҙур һорау менән файҙалана. Унан һуң парикмахерский, мунса хеҙмәте лә халыҡта бик популяр иҫәпләнә.

✓Быйыл дүрт айҙа Өфөлә наркотик сараларҙың һәм психотроп матдәләрҙең законһыҙ әйләнеше менән бәйле 700-ҙән ашыу енәйәт осрағы теркәлгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 19,5 процентҡа күберәк. Өфө эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре ошондай 102 осраҡты асыҡлауға һәм 301 енәйәтте асыуға өлгәшкән. 265 кеше енәйәт яуаплылығына тарттырылған.

✓5 июндә Өфөлә "Ҙур ҡаланың социаль мөхитендә йәш ғаилә" тип аталған III Бөтә Рәсәй конгресы үтәсәк. Унда күп милләтле йәмғиәттә заман йәштәре сәйәсәтен тормошҡа ашырыу перспективалары һәм үҙенсәлектәре тураһында фекер алышынасаҡ.

✓22 майҙа Ҡала мәҙәниәт һарайында "Вечерняя Уфа" гәзите ойошторолоуға 40 йыл тулыуға арналған кисә була. Кисә 18 сәғәттә башлана. Ә 17 сәғәттә мәҙәниәт һарайы фойеһында донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина бер юлы 25 кеше менән шашкала уйнаясаҡ.

✓16-17 майҙа Сипайловолағы "Приозерный" спорт комплексында Өфө предприятиелары һәм ойошмалары эшсе йәштәре араһында мини-футбол буйынса турнир үтәсәк. Турнирҙа 24 команда ҡатнаша. Уйындар иртәнге 10 сәғәттә башлана.

✓ *Быйылғы сара ла башҡорт халҡының милли-мәҙәни ҡиммәттәрен, ер-һыуҙарын, тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡыларын, телен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауға арналды.*



*АФАРИН*

**10 майҙа Хәйбулла районының Мәмбәт ауылы мәҙәниәт йортонда Бөйөк Еңеүҙең 64 йыллығана бағышланған кисә булып уҙҙы. 1999 йылдан башлап йыл һайын нәҡ ошо көндә үткәрелә килгән был сара күптән инде ябай кисә булыуҙан уҙып, изге йолаға әүерелгән. Сараның төп ойоштороусылары - Хәйбулла районы хакимиәте, ошо ауылда тыуып үҫеүселәр - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы кәңәшсеһе Миҙхәт Мәмбәтов һәм Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы начальнигы Исламитдин Мәмбәтов.**

# ТУЛЫ ҠАНЛЫ ТОРМОШ

## Хәйбулланың Мәмбәт ауылында...

### Ғәмәлдән - йолаға

Нимә һуң ул йола? Беҙ, ғәҙәттә, йоланы шулайыраҡ итеп кенә күҙаллайбыҙ: милли кейем кейеп, күмәкләп сәхнәгә сығып йырлау һәм бейеү, таҡмаҡ әйтеү йә ниндәйҙер боронғо йоланы, ғөрөф-ғәҙәтте сәхнәлә һынландырыу, һ.б. Ошо ерҙә шағир Рәйес Түләктең түбәндәге шиғыр юлдарын килтереү урынлы булыр ине:

...Эй, башҡортлоҡ! Сәхнәләрҙән төшкәс,
Сисеп ырғытылған eләнендәй,
Һүтеп ырғытылған толомдай...

Шулай шул: сәхнәләрҙән төшкәндән һуң барыһы ла онотола башлай. Милли рух та, туған тел дә. Ҡурай моңо ла тынып ҡала. Ошо урында йоланың, ғөрөф-ғәҙәттең зарурлығы иҫкә төшә. Бер тапҡыр башҡарылған эш, сара ғәмәл тип атала. Шул уҡ ғәмәл икенсе тапҡыр ҡабатланһа - ҡылыҡҡа әүерелә, өсөнсөгә ҡабатланһа - ғәҙәткә күсә, дүртенсегә ҡабатланһа - холоҡҡа олғаша. Ә нимә ул холоҡ? Холоҡ - ул характер. Ә нимә һуң ул характер? Характер - ул яҙмыш. Тимәк, изге ғәмәлде бер нисә тапҡыр ҡабатлаһаң, был изгелек шул ғәмәлде башҡараусыларҙың һәм унда ҡатнашыусыларҙың күркәм холҡона, яҡты яҙмышына әүерелә, тигән һүҙ. Был һүҙ юкта һүҙ булһын, тип кенә әйтелгән ялтырауыҡ һүҙҙәр түгел. Мәмбәттә үткән сарала мин быға тәрән инандым. Әйтергә кәрәк, был ауылдағы изге башланғысты башҡалар ҙа күтәреп алырға тейештер. Бына ошолай, ғәмәлдән башлап яҙмышҡа тиклемге үҫеш тәртибе буйынса ҡарағанда, мәмбәттәрҙең Бөйөк Еңеүгә арналған Хәтер һәм ҡәҙер кисәһен йыл һайын үткәреүе уларҙың үҙ-үҙен тотошонда, бербереһе һәм ҡунаҡтар менән мөғәмәләһендә асыҡ сағыла. Бигерәк тә уҡыусы балалар был байрамды һағынып көтөп ала икән. Балалар үҙҙәре өсөн үткәрелгән сараға ғына түгел, кис өлкәндәр өсөн ойошторолғанына ла килде. Ике осраҡта ла мәҙәниәт йорто тамашасы менән лыҡа тулы булды.

Кисәлә Гитлер фашизмына ҡаршы яуҙа башын һалған, яуҙан имен-һау әйләнеп ҡайтып, төрлө йылдарҙа донъя ҡуйған атай-олатайҙарын, тыл ауырлыҡтарын күтәргән ауылдаштарын иҫкә ала мәмбәттәр. Шунда уҡ баш ҡаланан килгән сәхнә оҫталарының концерты күрһәтелә. Ун йыл буйына ауыл халҡы башҡорт сәнғәте йондоҙҙарының барыһын да тиерлек үҙҙәренең сәхнәһендә күреү бәхетенә өлгәшкән. Был юлы Мәмбәт халҡы Өфө ҡалаһы мәҙәниәт һарайының йәш артистары Диана Ишниязова, Венера Юлгилдина, Тимур Юлгилдиндың, яҡташтары Сәйет Билаловтың, "Мираҫ" бейеү ансамбле солистарының сығышын яратып ҡабул итте.

### Ауылда - аҙан тауышы

Атаҡлы "Мәмбәт шәжәрәһе"ндә яҙылғанса, был ауыл башҡорттарҙың даланан ҡыуып алып ҡайтҡан йылҡы өйөрөндәге байталдың ялына йәбешеп килгән Йәнһары атлы ҡаҙаҡ малайынан таралып киткән нәҫелдән барлыҡҡа килгән. Йәнһарыға Үҫәргән волосы старшинаһы Һабыр Ҡотломбәтов Мәмбәт тип исем ҡуша. Мәмбәт нәҫеле башҡорт ерлегендә тамырланып, ныҡҡа арҡа терәп йәшәп киткәнсе байтаҡ ҡына ауырлыҡтар аша үтә, шулай ҙа бирешмәй, ҡыйынлыҡтарҙы берҙәм һәм тырыш булыуы арҡаһында еңеп сыға. Минеңсә, бер-береңә ярҙам итеү, ауыр саҡта терәк булыу ҙа был ауыл кешеләре өсөн изге йолаға әүерелгән һәм әле үткән сара ла шуның бер һөҙөмтәһе булып тора.

"Муза яңғыраған ерҙә пушкалар тынып тора", тиҙәр. Илебеҙ азатлығы өсөн йәнен фиҙа ҡылғандарҙы иҫкә алғанда йыр, ҡурай тауыштары яңғырауы, бейеүҙәр ҡуйылыуы батырҙарыбыҙ ҡаны юҡҡа түгелмәгәненә ишара бит. Был еңеү булмаһа, быларҙың береһе лә булмаҫ ине. Икенсенән, үҫеп килгән балалар Бөйөк Еңеү байрамын нәҡ ошондай рәүештә иҫендә ҡалдырһа, шуны йола күреп үҫһә, тәрбиәнең ошо формаһынан да яҡшыраҡ сара булыуы мөмкинме? Өсөнсөнән, ун йыл эсендә ошо сара үткәрелеү уңайынан ауыл халҡының көнкүрешен, ялын, һаулығын хәстәрләү йәһәтенән бик күп эштәр башҡарылған. Һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарына, уларҙың туғандарына йыл һайын әҙерләнгән бүләк тә дөйөм хәстәрлектең бәләкәй генә миҫалы. Быйыл мәмбәттәрҙең баш ҡалала йәшәүсе Мәмбәтов фамилиялы ауылдаштары ауыл мәсете өсөн тауыш көсәйтеү ҡоролмаһы бүләк итте. Хәҙер инде иртәле-кисле мәсеттә яңғыраған аҙан тауыштары ауыл сиктәрен сығып, киң далаға яңғырап ишетелеп торасаҡ.

**Әйткәндәй...**

**2006 йылдың июлендә Мәмбәттә үткән "Шәжәрә байрамы"нда ("Шәжәрә - йәшәүгә хоҡуҡ танытмаһы..", 2006, 30-сы һан) беҙ ауыл халҡының берҙәм һәм дәртле, бала-сағаның күп, ауылдың ян-яғы тәртипле, таҙа булыуы хаҡында әйтеп үткәйнек инде. Был юлы ла ауылға һоҡланып туйғыһыҙ. Шул уҡ ваҡытта ауылдың һәм уның тирә-яғының бөхтә булыуы байрам уңайынан махсус рәүештә генә эшләнмәүе күренеп тора. Мәктәптәге балалар һанына килгәндә лә, йәғни сағыштырмаса ҙур булмаған ауылдан йөҙҙән ашыу мәктәп уҡыусыһы булыуы күпкә ишара: тулы ҡанлы тормош бара был ауылда. Ҡаҙанылған уңыштарҙы һаҡларға, арттырырға ғына ҡала.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

*СОБХАНАЛЛА!*

# РУХЛАНДЫРЫР САРА ...

## рухландырыр Торатауҙа үтте

**"Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең Юрматы башҡорттары ҡоро менән берлектә йыл һайын Еңеү көнө - 9 майҙа изге Торатауҙа йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында махсус акция уҙғарыуы матур традицияға әйләнде.**



Тәүге акция бынан 5 йыл элек, Торатауҙың сәнәғәт объектына әйләндерелеп, юҡҡа сығыу хәүефе тыуғас, уны яҡлау маҡсатында ойошторолғайны. Быйылғы сара ла башҡорт халҡының милли-мәҙәни ҡиммәттәрен, ер-һыуҙарын, тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡыларын, телен, йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлауға арналды.

Акцияға ҡатнашыу маҡсатында Торатау итәгенә Өфө, Ишембай, Күмертау, Салауат ҡалаларынан, яҡын-тирәләге райондарҙан байтаҡ халыҡ йыйылды. Күркәм сарала дин әһелдәренең, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарының ҡатнашыуы халҡыбыҙ мәҙәниәтенә битараф булмағандарҙың арткандан-арта барыуы тураһында һөйләй. Ошо акцияла күтәрелгән мәсьәләләрҙе яҡтыртыу маҡсатында Башҡортостан радиоһы, район гәзиттәре хеҙмәткәрҙәре килеүе сараның мәртәбәһен арттырып ебәрҙе.

"Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов үҙенең сығышында Бөйөк Ватан һуғышында башҡорттар күрһәткән ҡаһарманлыҡ һәм фиҙакәрлектең ата-бабаларыбыҙҙың тарихи ватансылығының иң сағыу өлгөһө икәнлеген белдереп, сарала ҡатнашҡан һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарын Еңеү байрамы менән тәбрикләне. "Ветерандар ил һәм милләт яҙмышын яу яландарында яҡлаһа, беҙ, уларҙың вариҫтары, тыныс тормош шарттарында милли ҡиммәттәребеҙҙе юҡҡа сығарыуға юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ", - тине билдәле йәмәғәт эшмәкәре. Ул тарихи ерҙәребеҙҙе, тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау менән бер рәттән, бөгөнгө шарттарҙа мәктәптәрҙә тел, милли тарих һәм мәҙәниәт предметтарын уҡытыу буйынса ҡаршылыҡтар килеп тыуыуын иҫәпкә алып, киләсәгебеҙ өсөн үтә мөһим булған милли мәғариф өлкәһендә Федераль үҙәккә үҙ талаптарыбыҙҙы бар ҡәтғилегендә белдереү зарурлығына баҫым яһаны. Билдәле яҙыусы Йыһат Солтанов башҡорт тарихының бөтә донъя мәҙәниәтендә уникаль күренеш булыуы тураһындағы сығышынан һуң, акцияла ҡатнашыусыларға алып килгән бүләктәрен - ватансылыҡ идеялары менән һуғарылған тарихи-публицистик китаптарын таратты.

Ҡала һәм райондарҙан килгән йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ветерандар үҙ сығыштарында шулай уҡ милли мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау һәм үҫтереү буйынса борсолоулы уй-фекерҙәре менән бүлешеп, эшлекле тәҡдимдәр индерҙе. Сарала күтәрелгән мәсьәләләр буйынса тәҡдимдәрҙе власть органдарына еткереү маҡсатында тейешле резолюция ҡабул ителде.

Быйылғы акция барышында йәш дин әһелдәре бик әүҙем ҡатнашты, улар тарафынан Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандар рухына бағышлап, доғалар уҡылды, ҡорбан салынды. Акция изге Торатау түбәһенә артылыу, аҙан әйтеү һәм күмәкләп намаҙ ҡылыу менән тамамланды. Еңеү байрамын тәбиғәт ҡосағында изге уй-ниәттәр менән билдәләү рухи күтәренкелек шарттарында үтте, һәм ошо акцияла ҡатнашыусылар был саранан ҙур ҡәнәғәтләнеү алып таралышты.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

### Азияның билдәле шарлауыҡтары



Бөтә донъяға билдәле Ысыҡкүл күле тирәһендә бер нисә шарлауыҡ бар. Ҡырғыҙстандың көньяғында, Ош ҡалаһынан йыраҡ булмаған мәмерйәнән, 35 метр бейеклектән һөттәй апаҡ булып атылып сыҡҡан Абшир шарлауығы (Һөтлө һыу) аға.

Әммә Ҡырғыҙстандың 300 метрлыҡ бөйөк Арсланбоб ("Арыҫлан ауыҙы") шарлауығы киңерәк билдәле. Ул ике шарлауыҡтан: Бәләкәй Арсланбоб һәм Оло Арсланбобтан тора. Ул Тянь-Шандың көнбайыш һыртында, Ферган тауы алдында урынлашҡан.

Төньяҡ Кореяла Кымгансан тип аталған Алмас тауҙары бар. Был тауҙар буйлап аҡҡан Куренчхен - Туғыҙ Аждаһа йылғаһы каскадтарға һәм шарлауыҡтарға бигерәк бай. Уның үҙәне ҙур таштар менән ҡапланған, ә ҡеүәтле һыу ағымы ошо таштар араһынан аға. Бер ерҙә йылға 100 метрлыҡ бейеклектән ағып төшә һәм Алмас тауҙарының иң ҙур шарлауығы - Куренды барлыҡҡа килтерә.

Легендала бейек тау башындағы күл буйында йәшәгән ағалы-ҡустылы туғыҙ аждаһа тураһында һөйләнелә. Бер көн иртән улар уянғас та бик ябай ғына итеп кейенгән кешене күреп ҡалалар һәм уға иғтибар ҙа итмәйҙәр. Улар алдарында бөйөк Будда торғанын белмәй шул. Будда быға бик асыулана һәм ҡулындағы ҡағыҙ киҫәгенә "Ут" тигән иероглиф яҙа ла, күлгә ташлай. Күлдәге һыуҙы ут ялмай. Аждаһалар ҡасырға тотона һәм бейек тауҙан тәрән үҙәнгә һикерәләр. Аждаһалар төшкән ерҙә шарлауыҡтар барлыҡҡа килә, ә иң өлкән ағалары һикергән урында бөгөн 100 метрлыҡ Курен шаулай.

Пак-Ен шарлауығы тураһында ла матур бер легенда һаҡланған. Бик боронда Пак-Ен исемле ярлы егет бай ҡыҙына ғашиҡ була. Улар күл буйында йәшерен генә осрашып йөрөй. Тик бер ваҡыт ҡыҙға ғашиҡ булған бер бай егетте үлтерә һәм һыуға ташлай. Ҡыҙҙың күҙ йәшенән күлдең һыуы ташып түгелә һәм Алмас тауҙарында шарлауыҡ барлыҡҡа килә. Кешеләр уны егет хөрмәтенә Пак-Ен тип атаған.

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

**Баланы кем бағырға тейеш? Билдәле, баланы атай кеше тышҡы яҡтан белһә, сабый саҡтан башлап әсә уның эске торошон тоя. Тәрбиәлә был бик мөһим. Бала тынысһыҙлана башлаһа, әсәнең күңеле быны шундуҡ һиҙә. Әсә баланың тын алышынан, ҡарашынан, үҙен тотошонан, ығылдауынан аңлай уны. Тәбиғәт әсә менән баланы шулай яратҡан.**

# АТАЙҘАН - ҠОТ, ӘСӘЙҘӘН - ҺӨТ

## Баланы кем баға?

Шулай булғас, әлбиттә, баланы әсә бағырға тейеш. Балаһы тыуырын белгән хәстәрлекле әсә алдан уҡ яуаплы вазифаларҙан, кисектергеһеҙ башҡарыуҙы талап иткән эштән баш тартырға йәки бала табыуҙы кисектереп торорға тейеш.

Әсә балаһы өсөн ғүмер буйы яуаплы. Бындай раҫлау тәрбиә эшенән атайҙы ситләштереү тигәнде аңлатмай, уныһы алдағы һөйләшеүҙә булыр.

Сәләмәт ғаилә - сәләмәт йәмғиәт, тип әйтәбеҙ икән,беҙ баланың физик, рухи сәләмәтлеге хаҡында тәүҙән үк хәстәрлек күрергә тейешбеҙ.

**Иң элек сәләмәт туҡланыу хаҡында.**

Был мәсьәләлә мин, биш бала әсәһе буларак, аҙ ғына тәжрибәм менән уртаҡлашып китә аламдыр.

Баланы имеҙеү мотлаҡ. Үкенес, тәүге дүртәүһе тыуған саҡта медицинала яңылыш фекер таралғайны. Баланы тыуғас тә әсәгә бирмәйҙәр һәм йыйылма һөт бирәләр ине. Бишенсе баланы тапҡан саҡта был хата төҙәтелде,бала тыуғас та әсә үҙе имеҙә башлағайны.

**Әсәнең туҡланыуы.**

Бала тыуҙырыу йортона әле лә барырға, ейәндәрҙе алып ҡайтырға, башҡаларҙы күрергә тура килгеләй. Бала тапҡан әсәгә ниндәй генә аҙыҡ килтермәйҙәр. Хәҙер бит ни теләһәң, шул бар. Әлбиттә, күбеһе сит илдәрҙән килтерелгән емеш-еләк, башҡа төрлө ниғмәттәр алып килә. Йәш әсә өйгә ҡайтҡас та ошо күренеш дауам итә. Һөҙөмтәлә, баланың ауырып китеү ихтималлығы ла арта. Ә бит күп кенә ғалимдарҙың раҫлауынса, кешенең төп аҙығы йәки туймылығы - үҙ ерендә үҫкән аҙыҡ булырға тейеш. Борон башҡорттарҙа ҡоротло һурпа, ҡаймаҡлы сәй, ҡоймаҡ, талҡан, әжегәй менән һыйлағандар имеҙгән әсәне. Ҡаныбыҙ, булмышыбыҙ ошо аҙыҡтарҙан көс-ҡеүәт алырға ҡулайлашҡан, уларға күнеккән. Башҡа төрлө аҙыҡтар тәмләп ҡарау, күҙ ҡыҙыуын ҡандырыу өсөн генә. Йәғни улар байрам аҙыҡтары. Көндәлек аҙыҡ борондан булмышыбыҙ күнеккән ризыҡтарҙан торорға тейеш.

Мин балаларҙы йәй көндәре мөмкин тиклем ҡымыҙға алып барырға, үҙ ҡулдары менән өҙҙөртөп, ялан емештәре ашатырға, һыйыр ағы менән туҡландырырға тырыштым. Йәйәү йөрөү беҙҙең өсөн ғәҙәти хәл булды.

Балалар баҡсаһында улар отпускынан отпускыға тиклем булды, ауырып, больницала ятыу осраҡтары булманы. Бер тапҡыр ғына ике бәләкәйе менән яңылыш диагноз арҡаһында бер аҙна тикшерелеп яттыҡ. Өшөп ҡайтһалар, табандарын йылыттым, йүткерһәләр - май иретеп эсерҙем, кисен ҡоротлап- майлап һурпа йәки баллап һөт эсерҙем. Поликлиникаға прививкаға алып барған саҡта балаларым: "Ни эшләп башҡа балаларҙың медицина карточкалары ҡалын, беҙҙеке йоҡа ғына", - тип аптырай торғайны. Балаларым да үҙ балаларын шулай бағырға тырыша. Һыуыҡ тейеүҙән башҡа етди сирҙәр менән йонсоғандары юҡ.

Бында мин иң элек ашау режимын тотоуҙалыр ғилләтип уйлайым. Ете дингеҙ артынан килтерелгән ят аҙыҡтарға, тәм-томға, резина һағыҙҙарға балалар битараф.

Ашҡаҙан ауыр эшкәртә торған аҙыҡ ашарға тура килһә, балаға мотлаҡ ҡорот ҡаптырып ҡуйырға кәрәк. Тағы шуныһы, байрам өҫтәлә әҙерләгән саҡта, ризыҡ төрләйбеҙ тип, бер-береһе менән тап килмәгән аҙыҡтарҙан салат яһау ҙа ашҡаҙанға ауырға тура килә. Башҡорт ризыҡ бутап ашамаған, һәр аҙыҡты айырым ашаған.

Баланы үҙең баҡҡанда ғына быларға иғтибар итеп була. Бала ҡараусы сит кеше ни тиклем генә һәйбәт булмаһын, әсәй түгел. Ата-әсәнең баланы тынысландырыу өсөн тәҙрә төбөнә ултыртып ҡуйған, сәғәттәр буйы телевизор ҡараткан, бешереп ашатыу урынына ҡаты-ҡото менән туҡландырған осраҡтары ла бар.

Әсәйҙәргә әйтәһе фекерем шул: ни генә тимә, баланың үҫмер осоро үткәнгә тиклем оло яуаплылыҡ әсә елкәһендә. Хеҙмәткәр ҡатын булыу беҙҙең мотлаҡ бурыс һаналһа ла иң оло бурысыбыҙ - ҡатын-әсә булыу.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# МОҢОБОҘ ШӘЖӘРӘҺЕН...

## һаҡлау кәрәк

**Музыка белгесе, этнограф С. Рыбаков яҙмаларынан: "29 июнь көнө (1894 йыл - Ю.Ғ.) Андрей Степанович менән II Этҡол (хәҙерге Баймаҡ районы - Ю.Ғ.) ауылына юл тоттоҡ. Гусев танылған ҡурайсы Хәмит (Хәмит Әлмөхәмәтов - данлыҡлы Хәмит сәсән - Ю.Ғ.) менән осраштырырға ниәтләгәйне, тик уны осратып булманы.**

Баҙар көнө ине, берәй ҡурайсы тап булмаҫмы, тип баҙарға сыҡтыҡ. Баҙарҙа ҡурайсы табылды, Исхаҡ ауылынан, Толомғужа Ғөбәйҙуллин исеме. Ҡурайсыһыңмы, тип һораным. Эйе, тип яуап бирҙе. Яҡшы уйнайһыңмы? Нисек инде яҡшы булмаһын, аҙ-маҙ булдырабыҙ. Эргә-тирәләге халыҡ, бына тиген ҡурайсы, беренсе ҡурайсы, тип ҡеүәтләп ебәрҙе.


Т. Ғөбәйҙуллин

Толомғужа Ғөбәйҙуллин менән өйгә килеп инеүебеҙ булды, ул балаҫҡа ултырып, ҡурайында уйнай ҙа башланы, көйҙәре матур, быуна, исмаһам, табыш, тип йәһәтерәк яҙа башланым. Ҡурайсы менән оҙаҡ ултырҙыҡ, ул уйнай, мин яҙам, араһында ҡымыҙ эсәбеҙ. Ҡурайсы бик оҫта булып сыҡты. Мин уға кискә ҡалырға тәҡдим иттем, ул риза булды һәм тамаҡ ялғап, эште дауам иттек, бихисап йырҙар, көйҙәр яҙып алырға насип булды. Толомғужа Ғөбәйҙуллин ҡурайҙа уйнағанда ағайым уның һүрәтен эшләне, был һүрәт китаптың 118-се битендә баҫылды".

С.Рыбаковтың "Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта" (СПб, 1897) китабына Толомғужа Ғөбәйҙуллин башҡарыуында яҙып алынған "Буранбай", "Иһбирҙин", "Мөхтәсиб", "Һары ла сәс", "Киленсәк", "Бүртә ат", "Фани донья", "Трахтирская", "Форт-Перовский", "Манеж" көйҙәренең ноталары һәм уларға аңлатмалар ингән.

Бөгөн ер йөҙөндә Исхаҡ ауылы юҡ. Күренекле башҡорт тарихсыһы Әнүәр Әсфәндиәровтың "Башҡортостан ауылдары тарихы" тип аталған фәнни белешмәһендә был ауыл тураһында түбәндәге мәғлүмәттәр килтерелә: 1792 йылда Таулыҡай (хәҙерге Баймаҡ районы) ауылынан Исхаҡ Солтанов үҙенең улдары, ейәндәре, башҡа ауылдаштары менән, бөтәһе 50 кеше, Таулы йылғаһының ҡушылдыҡтары Сыбалайыр, Саҡмағош йылғалары (хәҙерге Баймаҡ районы биләмәләрендә) буйында Исхаҡ ауылына нигеҙ һала. 1859 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыуҙа Исхаҡ ауылында 150 кеше теркәлгән. "Ер өсөн бәхәстәр арҡаһында улар үҙҙәренең төп ауылына кире ҡайта,"- тип яҙа Әнүәр Әсфәндиәров.

1993 йылда минә Таулыҡайҙан атайымдың дуҫы, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Зекериә Йәмлихә улы Ишалиндан хат килеп төштө. Сәләм һәм хәл-әхүәл белешкәндән һуң ул былай тип яҙғайны: "Юлай, һиңә беҙ хатты яҙыуымдың төп сәбәбе - бер кешенең яҙмышы тураһында: ул үҙебеҙҙең Таулыҡай ауылы кешеһе, бәлки, ишетә беләһеңдер Исәнғолов Бәҙретдин Мөхәмәтғәле улы. Заманында, 1936-1938 йылдарҙа Өфөнән, Башҡортостан радиоһын шаулатып, ҡурайҙа уйнаны һәм Таулыҡай ауылының даны булды. Ул Таулыҡайға килгәнендә ҡартатайына туктай торғайны, Исәнғоловтар һеҙгә туғандар. Бәҙри ҡурайсының яҙмаларын табып, радионан йәки телевизорҙан ишеттерһәгеҙ, яҡшы булыр ине..."


Б. Исәнғолов

Зекериә олатайҙың үтенесен үтәп булманы, сөнки ул йылдарҙа ҡурайсылар тура эфирҙа уйнаған, уларҙың уйнауын яҙҙырып алмағандар, техник мөмкинлек шулай булған. Туғанлыҡ яғына килгәндә, Шоңҡар Ҡотлосуриндың икенсе улы Исәнғолдоң улы Сәғәҙәттең улы Ҡолмөхәмәттең улы Мөхәмәтғәленең улы Бәҙретдиндең Шоңҡарҙың өлкән улы Сәйетбатталдың улы Ғәйнетдиндең улы, минең ҡартатайым Әбделғәлимгә туған тип килеп йөрөүе тәбиғи. Шоңҡар ярсыктары бит инде. Шуныһын да күрһәтеп үтеү артыҡ булмаҫ: Мөхәмәтғәле Исәнғоловтың бер туған һеңлеһе Рабиға Байым ауылынан Кәлимулла Хәлил улы Йылҡыбаевҡа кейәүгә сыға. Был никахта тыуған Ишбулды Хәлиловтың улдарының береһе ҡурайсы Зыя Хәлилов та ҡартаһәһе аша Таулыҡай ауылы Шоңҡар затынан булып сыға.

2005 йылда Баймаҡта ҡурайсылар, сәсәндәр, бейеүселәр бәйгеһе үткәрелгәйне. Шунда Баймаҡ районы Бәхтегәрәй ауылынан Нәсибулла Ғибәт улы Хоҙайбирҙин "Форт-Перовский" көйөнә бик матур итеп бейене һәм "Боронғоса бейегәне өсөн" номинацияһында бүләкләнде. Нәсибулла ағай менән бер аҙ әңгәмәләшергә насип булды. 1928 йылғы икән, донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған. Ғәҙәттә, өлкән кешеләр менән аралашҡанда элекке ҡурайсылар, йырауселар, бейеүселәр, сәсәндәр тураһында һорашам. Түбәндә Нәсибулла ағайҙың һөйләгәне үҙгәртелмәйенсә килтерелә, унда таулыҡайҙар тураһында ла мәғлүмәт бар: "Мин исемдәре билдәһеҙерәк ҡурайсыларҙы әйтеп үтәм. Күсей ауылында Исхаҡ Аҫҡаров тигән олатай булды. 50-се йылдарҙан мин уны беләм, өлкән кеше ине, шәп уйнаны. Ирәндек буйы Моҫтай ауылынан данлыҡлы ҡурайсы Рәхмәтулла Бүләкәновтың ҡустыһы Әхмәҙулла Бүләкәнов та оҫта ҡурайсы булды. Әхмәҙулла ағай менән 15 йыл урман хужалығында бергә эшләнем, һәйбәт кеше ине, ҡурайын гел бергә алып йөрөнө. Был ауылдан Ғәлимйән тигән ағай бар ине, ул да бик һәйбәт уйнаны. Беҙҙең ауыл Бәхтегәрәйҙә Мөхәммәт Сәйгәфәров бик оҫта ҡурайсы булды. Бөйөк Ватан һуғышынан әйләнеп ҡайта алманы. Мерәҫ ауылында бер туғандар Муллағәле һәм Хажғәле Хәсәновтар, Шәйсолтан Мерәсов ағайҙар бик оҫта ҡурайсы булдылар. Хажғәле Хәсәнов 50-се йылдарҙа Өфөгә барып, ҡурайсылар бәйгеһендә ҡатнашып йөрөнө. Баймаҡта Исәнғолов Бәҙретдин ағай йәшәне. Таулыҡайҙан сығышы. Ҡурайы йыуан, уйнағанда ярһып китеп, ажарланып уйнай торғайны. Шул хәтлем бирелеп уйнай, шуға "биреле ҡурайсы" тинеләр. Һуғышҡа ҡәҙәрле Граф күленән алыҫ түгел Йылҡыбай тигән ауыл бар ине, шунда Салихов Хөсәйен тигән ағай булды, сығышы Таулыҡай ауылынан ине, шәп уйнаны, оҫта ҡурайсы булды. Тулыбаев Байрамғәле тигән ағай булды, ул да һәйбәт уйнаны, ул да Таулыҡайҙан ине. Баймырҙа ауылынан Ульябаев Сабирйән тигән олатай булды, һуңғы ваҡыт Ҡарамалыла йәшәне, оҫта уйнаны ҡурайҙа. Ҡарамалынан тағы Байгилдин Ғәлимйән тигән ҡурайсы булды, ул да яҡшы уйнаны. Муллаҡай ауылынан Зәйнуллин Абдулла ағай оҫта ҡурайсы булды. Танһыҡҡужин Шарап тигән ағай булды. Шарап ағай бик көйлө уйнаны инде. Шарап ағай, уйна әле, тип һораһалар, ҡустылар, уйнаһам, аҙаҡ үҙемә килешмәй, тип әйтә торғайны. Шул хәтле моңло итеп, ныҡ кисереп уйнай, хәлен алғандыр, күрәһең. Ҡолсоранан Самарбаев Сәйфулла ағай һәйбәт уйнаны. Быны ошо ҡурайсыларҙы бәләкәй саҡтан беләм. Улар элекке ҡурайсылар инде. Хәҙер ярты метрлыҡ ҡурай тотоп алалар ҙа, сәхнәлә сабып йөрөп уйнайҙар, ул ҡурайсы буламы?.. "

1978 йылда отпуск ваҡытында ҡулыма магнитофон тотоп, фольклор материалдары йыйырға Баймаҡ районына сәфәргә сыҡтым. Тыуған ауылым Таулыҡайҙа бала сағымдан ҡурайсы тигән даны бар икәнен белгән Салихов Хөсәйен олатайға барҙым. Әсәһе аша Шоңҡар затынан, ейәненең ейәне. Минең ҡурайҙа уйнауымды белә. Етмәһә, шул йылы Йомабай Исәнбаев исемендәге призға ҡурайсыларҙың 1-се республика бәйгеһендә

***✓ Спектаклдең уңышы драматургтың ни дәрәжәлә сифатлы итеп яҙыуынан да тора. Юғиһә, беҙҙең ҡайһы бер драматургтар, режиссерҙар, артистар берәй нәмә килтереп сығарып әле, тип, әҫәрҙе арлы-бирле яҙыуға күнеккән.***

**Айрат Абушахманов М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшләгән ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙен һәләтле һәм оҫта режиссер итеп танытырға өлгөрҙө. Тамашасы әленән-әле уның үҙенсәлекле балҡыш менән сәхнәгә сыҡҡан спектаклдәренә ҡарап һоҡланыу белдерә. Ул сәхнәләштергән Кен Кизиның "Кәкүк ояһы" спектакле былтыр "Алтын битлек" милли театрҙар фестивалендә ҡатнашыуға өлгәште. Был мәртәбәле сарала театр коллективы Башҡортостандан ғына түгел, ә күрше республика театрҙары араһынан да беренселәрҙән булып ҡатнашты. Әйткәндәй, Айрат театр тарихында иң йәш баш режиссер. Ошо көндәрҙә ул Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына тәҡдим ителде. Уның театр сәнғәте һәм башҡа төшөнсәләр хаҡындағы фекерҙәрен бик ҡыҙыҡлы тип таптыҡ һәм гәзит уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ. Һүҙ - Айрат АБУШАХМАНОВҡа:**

# МӘСЕТ КЕҮЕК ИЗГЕ килһен тамашасы

## Һәр кемдең сәнғәткә хаҡы бар

Бер китапта ниндәйҙер режиссерҙың һуғыштан һуң ил аслыҡ, аҡсаһыҙлыҡ кисергән ваҡытта халыҡтың театрға әүҙем йөрөүе, ә илдең иҡтисади хәле яҡшыра башлағас, сәнғәткә иғтибар кәмеүе хаҡында әйткәнен уҡығайным. 2000 йылда Америкала, Швейцарияла булғанда ла шәйләнем мин быны. Әле бына беҙҙең илебеҙ ҙә финанс көрсөгөнә килеп терәлде, әммә беҙгә уның еле артыҡ ҡағылмаған төҫлө тоям мин. Тамашасы беҙгә элеккегә ҡарағанда күберәк тә йөрөй башлаған кеүек тойола. Бары тик спектаклде сәхнәгә сығарыу ғына финанс яғынан ауырлашты. Ә шулай ҙа, минеңсә, театр ниндәй генә хәлгә ҡалғанда ла йәшәйәсәк, иң мөһиме, тамашасы ғына булһын.

Ғөмүмән, театр - ул аҡса эшләй торған ғына урын түгел, ул шулай уҡ мәсет кеүек изге йорт. Һәр кемгә уның ишеге асыҡ булырға тейеш. Әгәр кеше сәнғәткә мохтаж икән, уға был мөмкинлекте бушлай ҙа биреү дөрөҫ булыр ине. Нью-Йоркта гәйәт ҙур художество музейы бар, унда бөйөк сәнғәт әһелдәренең картиналары, боронғо скульптура өлгөләре, тағы бик күп тарихи ҡомартҡылар тупланған. Был музейға инеү өсөн ул ваҡытта билет хаҡы егерме доллар тора ине. Мине иң аптыратҡаны шул булды: унда һәр теләгән кеше, аҡсаһы булыу-булмауына ҡарамаҫтан, инә ала, йәғни күпме түләй ала, шул тиклем аҡса бирә лә инеп китә. Хәлле кешеләр, әлбиттә, тейешле сумманы түләп инә, сөнки уларҙың намыҫы шуны ҡуша. Был системаның ни өсөн шулай ҡоролоуын һорашҡас, улар миңә һәр кемдең рухиәтен үҫтерергә, эске донъяһын байытырға хаҡы бар һәм кеше ярлы булғаны өсөн генә ул сәнғәттән мәхрүм булырға тейеш түгел, тинеләр. Минеңсә, театрға ла һәр теләгән тамашасы йөрөй алырға тейеш. Әммә беҙҙең халыҡтың психологияһы башҡасараҡ, уларға ирек ҡуйһаң, барыһы ла бушҡа йөрөй башлаясаҡ. Мөмкинлегең бар икән, түләргә кәрәк. Сөнки, кемдер әйтмешләй, биреүсе ҡул, шул уҡ алыусы ҡул да булып тора һәм ул һинһ икеләтә әйләнеп ҡайта, ә буштан килгән бушҡа оса. Бөгөн бигерәк тә ауылдарҙа ябай халыҡ сәнғәткә ҙур ихтыяж кисерә, районДарға гастролдәр минән йышыраҡ сыҡҡанда ла яҡшы булыр ине.

## Тамашасыға көс, ышаныс бирерҙәй спектакль кәрәк

Бөгөн халыҡты афиша әлеп ҡуйып ҡына театрға килтереп ултыртып булмай. Уның рухиәтенә, зауығына тап килерҙәй спектаклдәр сығарыу - тамашасыны йәлеп итеүҙең иң төп сараһы. Уларҙы бөгөн берәй билдәле датаға, йә юбилейға ҡарата ҡуйылған спектакль менән генә алдаштырып булмай. Ә күпселек драматургтарыбыҙ тап шулай эшләп хаталана ла инде. Ҡайһылары тамашасыны көлдөрөргә кәрәк, тип, комедия яҙыу менән мауыға. Сәхнәнән нотоҡ уҡыу ҙа тамашасыны ялҡыта. Шуға ла ҡайһы бер әҫәрҙәр сәхнәгә сыға алмай, оҙаҡ ятып ташлай. Бөгөнгө көндә сәхнәлә барған күренеш тормошта ваҡиғаларға ауаздаш булырға тейеш. Ижади коллектив йәмғиәттә үҙен борсоған етди проблемаларҙы сағыу төҫкә буямайынса, нисек бар, шулай итеп күрһәтһә генә халыҡтың күңеленә үтеп инә ала, уның һөйөүен яулай. Ниндәй генә жанрҙағы сәхнә әҫәре ҡуйылыуға ҡарамаҫтан, тамашасы театрҙан башы ауыртып түгел, ә ҡанатланып, рухланып, күңелен байытып ҡайтырға тейеш.

Ә бына мин шәхсән үҙем спектакль ҡуйыр өсөн пьеса һайлағанда интуицияма ҡолаҡ һалам. Бүтәндәр тамашасы өсөн әһәмиәтле, ҡыҙыҡлы булырҙай әйбер күрмәгәндә лә, мин уның үҙенсәлеген табам һәм уңышлы буласағын алдан тойомлайым. Мәҫәлән, былтыр ҡуйылған "Мулла" спектаклендә мине төп геройҙы йәш егет уйнауы ҡыҙыҡһындырҙы. Кешеләр мулланы, ғәҙәттә, ҡарт бабай тип күрергә өйрәнгән, ә совет ваҡытында театрҙа, әҙәбиәттә муллаларҙан көлгәндәр. Бөгөнгө йәштәргә герой етешмәй. Элек комсомол заманында Матросовтар, Кошевойҙар өлгө булып торған һәм йәштәр уларға оҡшарға тырышҡан, ә бөгөн ундай лидерҙар юҡ. Беҙгә бөгөн Америка геройҙары - супермендар, кеше-үрмәксе һәм башҡалар килеп инә башланы. Йәштәрҙең психикаһы урынына ултырып, камиллашып бөтмәгән һәм уларҙың тормош тәжрибәһе лә юҡ. Тап шуға ла уларға был тормошта үҙҙәренә ниндәй ҙә булһа юлдан китергә йүнәлеш биреүсе кәрәк. Дөрөҫ юлды атай-әсәй башына туҡып ҡына һеңдерә алмай. Шуға ла йәш кеше быныдай геройҙарҙы сәнғәт аша табып, үҙе лә һиҙмәҫтән ғашиҡ булып, уға оҡшарға тырышырға тейеш. Яҡшы герой юҡ икән, ул урынды кире геройҙар - бандиттар, мафия, эскеселәр биләй башлай. Йәштәр ошо алама геройҙарға эйәреп, үҙе лә аңламайынса, кешегә ҡул күтәрә, һуғыша башлай. Быны ул үҙенсә "геройлыҡ" күрһәтеү тип уйлай. Ә был пьесалағы мулла ниндәйҙер өгөт-нәсихәт уҡып ҡына йөрөгән плакаттағы герой түгел, ул ярата ла белә, үҙен дә, ҡыҙын да яҡлай ала, уҡымышлы ла. Балалар йортонда тәрбиәләнеп, холоҡ тәҙәтеү колонияһында ултырып сыҡһа ла, үҙендә көс, ихтыяр табып, тура юлға баҫҡан кеше. Ошо яғы менән был пьеса миңә үҙенә йәлеп итте.

Театр - ул аралашыу урыны. Йәғни тамашасы менән ижади коллектив күҙмә-күҙ ҡарашып әңгәмә ҡора. Икенсеһе тәүгеһе турағында һөйләй, ә тегене тыңлай, сөнки уға үҙе тураһында аңларға кәрәк бит. Әгәр ҙә инде һөйләүсе тыңлаусыға "һин алама, һин тегеләй эшлә, былай эшлә", тип тылҡыһа, тамашасы театрға башҡа килмәйәсәк, биҙәсәк. Шул уҡ ваҡытта "һин яҡшы, һин матур", тип алдап ҡына торорға ла ярамай. "Һинең ошондайыраҡ проблемаларың бар һәм һин уны еңеп сыға алаһың", тип кешелә өмөт уятырға кәрәк. "Мулла" спектакле аҙағында муллаға аталар, күпселек тамашасы, был герой үлергә тейеш, тип ҡабул итте. Ә минең геройҙы үлтергем килмәне. Автор менән кәңәшләшкәс, ул да уны тере ҡалдырыу яғында булды, сөнки төп геройҙы үлтерһәк, беҙ кешенең ерҙә ғәзеллек, яҡшылыҡ барлығына өмөтөн өҙәр инек.

## Режиссер өсөн артист һайлау ҙа ҙур яуаплылыҡ

Спектакль өсөн әҫәрҙе дөрөҫ һайлау - иң мөһим эштәрҙең береһе. Бик тырышҡанда, ҡайһы бер хөрт кенә әҫәрҙән дә эш сығарырға мөмкин, әммә барыбер ҙә уның мәғәнәһе булмай. Спектаклдең уңышы драматургтың ни дәрәжәлә сифатлы итеп яҙыуынан да тора. Юғиһә, беҙҙең ҡайһы бер драматургтар, режиссерҙар, артистар берәй нәмә килтереп сығарып әле, тип, әҫәрҙе арлы-бирле яҙыуға күнеккән. Әгәр ҙә драматург күтәргән проблеманы йөрәге аша үткәреп, тулы ҡанлы әҫәр яҙыуға өлгәшһә, уны уҡыу менән ижади коллектив илһамланып эшкә тотона, артистар текстка ғашиҡ була, хатта үҙҙәренең күңеленән сығарғандай итеп һөйләй. Ошо дәрәжәгә етер өсөн артист текстка ышанырға тейеш. Сөнки ҡайһы бер тексты, ти тиклем генә тырышһа ла, артист күңеленә һеңдерә алмай, оҙаҡ ятлай алмай яфалана.

Яңы спектаклгә артистар һайлау ҙа режиссерҙан ҙур яуаплылыҡ талап итә. Ҡайһы саҡта ролде артисҡа башҡара аласағына ышанып бирәһең, асылда, ул уйнай алмай ҙа ҡуя. Баҡтиһәң, артист быға тиклем дә ошоға оҡшаш образдар тыуҙырған, уны тулыһынса асып бөткән һәм бүтәнсә ундай ролдә уйнауҙың ҡыҙығын тапмай. Ул, әлбиттә, уйнай, әммә ниндәһелер килешеп етмәгән төҫлө. Ә ҡайһылыр артисҡа ғүмерендә уйнамаған ят роль бирәһең, хатта бүтәндәр ҙә быға аптырап ҡуя, атҡарып сығара алмаҫ, тип уйлай, әммә ул бына тигән итеп образды ҡойоп ҡуя. Тимәк, уның эсендә әле асылып етмәгән ошондай типтағы образ йәшәгән була. Ҡарайған көмөштө таҙартып ебәргәндән һуң нисек ялтырап китһә, был артист та яңы образын тыуҙырғандан һуң балҡып китә. Быны тамашасы ла һиҙә.

Ғөмүмән алғанда, режиссер эше бер ваҡытта ла туҡталмай, ҡайҙа йөрөһә лә ул пьесалары менән ҡайнай, ижади эҙләнеү өҫтөндә була. Тәүге йылда институтта алынған ғилем, һабаҡ менән эшләйһең, әммә тора-бара ул бөтә, уны үҫтерергә кәрәк. Миндә әлегә оло режиссерҙарҙа булған тормош тәжрибәһе юҡ. Мин үҙемде ошо ике йылға араһында торған күпер һымаҡ хис итәм. Әлифба бөттө, ә тормош һабағы башланмаған кеүек...

## Профессияның абруйы төшһә, ирҙәр юғала

Бөгөн театрҙарыбыҙ башҡорт драматургтарына ҙур ҡытлыҡ кисерә. Беҙгә был проблеманы хәл итеү өсөн күршеләрҙән өлгө алырға кәрәк. Татарстанда драматургтар араһында иң яҡшы сәхнә әҫәренә конкурстар үткәрелә. Һөҙөмтәлә, бихисап пьеса өлгөләре барлыҡҡа килә, йәш ижадсылар үҫеп сыға, сөнки ижад итеү өсөн стимул бар - бүләкләү суммаһы арыу ғына. Былтыр Туфан Миңнуллиндың "Мулла"һы ошо конкурста еңеп сыҡһа, быйыл Илгиз Зәйниев тиген йәш драматург беренсе урын алды. Уның "Люстра" тигән спектаклен беҙҙең Милли йәштәр театры ҡуйҙы. Беҙҙең драматургтар "Минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе" тигән кеүек ҡойто ғына әҫәрҙәр алып килә лә, ҡабул итмәһәң, әҫәре өҫтөнән яңынан эшләп тормай, ҡул ғына һелтәп ҡуя. Иңкәүҙәр ғазабы, ныҡышмал эҙләнеүҙәр аша яҙылған әҫәрҙәр бик һирәк осрай. Тағы ла беҙҙең драматургтарға халыҡсанлыҡ етешмәй. Гел генә классик әҫәрҙәр сәхнәләштереп булмай, театр



***Минең ҡуйған спектаклдәремдә намыҫ өсөн аҡ менән ҡара кешенең күңелендә көрәш бара. Минеңсә, алама кешеләр ҙә, артыҡ һәйбәт кешеләр ҙә юҡ. Ул ҡайһылыр ваҡытта ҡырын эш, ә ҡайһы саҡта изгеһен эшләп ҡуя. Насарлыҡ ҡылған ваҡытта кешене выждан ғазабы борсорға тейеш. Әгәр был тойғо унда барлыҡҡа килмәй икән, уның күңеленә май бөрөп, ул тағы ла ҡырын эшкә бара. Кеше ҡылған насарлыҡтары өсөн үҙ ваҡытында язаһын алып ҡалырға тейеш, юғиһә, һуңынан ул ҡот оскос хәлгә әүерелеп, кеше упҡынға тәгәрәй башлай. Бәләкәй генә уңышһыҙлыҡҡа осрайһың икән, уның өсөн ҡайғырырға түгел, ҡыуанырға кәрәк. Был Юғарынан иҫкәртеү, һынау булып тора, шуға ла һин ауыр хәлгә тарып, юғалып ҡалырға түгел, уны һынау булараҡ ҡабул итеп, үҙ хатаңда төҙәлергә, яңы көс менән аяҡҡа баҫырға тейешһең.***

# ЙОРТТАЙ КҮРЕП... театрға

заманса яҡтыртылған милли драматургияны ла ҡуйырға тейеш. Драматургтар театрҙа үҫә. Ни өсөн Туфан ағай Миңнуллиндың пьесаларын һәр кем яратып ҡабул итә? Сөнки ул театрҙан ҡайтышмай.

Ғөмүмән, бөгөн әҙәбиәттә күләмле әҫәрҙәр кәмене. Профессияның абруйы төшһә, ул өлкәлә ирҙәр юғала башлай. Элек сәнғәт өлкәһендә күпселек ирҙәр эшләгән, режиссер, директор вазифаһын күберәген улар башҡарған. Ә бөгөн сәнғәткә хеҙмәт итеүсенең эше тейешенсә баһаланмағас, ир кеше ғаиләһен ҡараусы булараҡ, бүтән юлдан китергә мәжбүр. Шуға күрә лә был урындарға ҡатындар әүҙем килә башланы һәм, әйтергә кәрәк, улар үҙҙәрен бик лайыҡлы күрһәтә килә. Уларҙың әҫәрҙәрендә ҡатын-ҡыҙ психологияһы ярылып ята, йәғни хистойғо өҫтөнлөк итә. Беҙҙең ҡатындар күңелдәре менән дә иҫ киткес матур, көслө ихтыярлы, сабыр холоҡлолар. Бары тик башҡорт ҡатыны ғына ғәфү итә белә, ирен батып барған ерҙән ҡотҡара ала. Ә шулай ҙа сәхнәнән ирҙәрҙе ирҙәрсә тәрбиәләү тураһындағы һүҙ ҙә яңғырарға тейеш. Ә быны ир һүҙе итеп яңғыратыу яҡшы булыр ине. Ир-режиссерҙар, ир-артистар бит үҙ заманында глобаль проблемалар күтәрә ине. Бөгөн ирҙәр араһында карьерист, ошаҡсылар артты. Намыҫлы, ғәҙеллеккә ынтылған ирҙәрҙең был тормошта үҙ урынын тапмай йә эскелеккә бирелеүе, йә енәйәткә барыуы күҙәтелә. Бөгөн ирҙәрҙе ике төргә бүлер инем: берәүҙәре был тормош менән бәхәсләшеп йәшәй, ағымға ҡаршы йөҙөп, ғәҙеллеккә ынтыла, ә икенселәре ошо тормошҡа ҡулайлашырға тырыша. Ирҙәрҙе ҡотҡарырға, тигән саҡырыу дөрөҫ, быны беҙ бөгөн сәхнә әҫәрҙәре аша ла тормошҡа ашырырға тейешбеҙ.

Минең ҡуйған спектаклдәремдә намыҫ өсөн аҡ менән ҡара кешенең күңелендә көрәш бара. Минеңсә, алама кешеләр ҙә, артыҡ һәйбәт кешеләр ҙә юҡ. Ул ҡайһылыр ваҡытта ҡырын эш, ә ҡайһы саҡта изгеһен эшләп ҡуя. Насарлыҡ ҡылған ваҡытта кешене выждан ғазабы борсорға тейеш. Әгәр был тойғо унда барлыҡҡа килмәй икән, уның күңеленә май бөрөп, ул тағы ла ҡырын эшкә бара. Кеше ҡылған насарлыҡтары өсөн үҙ ваҡытында яҙаһын алып ҡалырға тейеш, юғиһә, һуңынан ул ҡот осҡос хәлгә әүерелеп, кеше упҡынға тәгәрәй башлай. Бәләкәй генә уңышһыҙлыҡҡа осрайһың икән, уның өсөн ҡайғырырға түгел, ҡыуанырға кәрәк. Был Юғарынан иҫкәртеү, һынау булып тора, шуға ла һин ауыр хәлгә тарып, юғалып ҡалырға түгел, уны һынау булараҡ ҡабул итеп, үҙ хатаңда төҙәлергә, яңы көс менән аяҡҡа баҫырға тейешһең.

## Кеше психологияһы һәр ҡайҙа ла бер үк

Беҙҙең театрҙы сит ил, күрше республика әҫәрҙәрен ҡуйып, башҡорт психологияһын, башҡорт фәлсәфәһен сикләй, тип ғәйепләүселәр ҙә бар. Әммә мин быны башҡасараҡ аңлатыр инем. Мостай Кәрим: "Ижадта тар миллилек уны ярлыландыра", - тип әйткән. Мәҫәлән, шул уҡ Мостай Кәрим, Рәсүл Ғамзатов, Сыңғыҙ Айтматов милли автор булып торһалар ҙа, уларҙың әҫәрҙәре һәр халыҡҡа яҡын, сөнки унда дөйөм кешелек проблемаһы күтәрелә, тәрән фәлсәфә ята. Уҙған йыл ҡытайҙар беҙҙең "Ҡоҙаса"ны ни тиклем ихлас ҡабул итһә, быйыл төрөктәрҙең "Шәүрәкәй"ҙе аңлап, кәрәк ерҙә көлөп, кәрәк ерҙә уйланып, кәрәк ерҙә ҡул сабып ултырыуҙары мине аптыратты. Шуға ла кеше психологияһы һәр ҡайҙа ла бер төрлө, был - башҡорт характеры, тип айырып ҡына ҡарарға кәрәкмәйҙер ул, тигән һығымтаға килдем.

Уҡып йөрөгән сағымда, Нью-Йорктан Чикагоға автобуста барырға тура килде. Минең урыным негритянка әбей янына тура килде, дөрөҫөрәге, ул үҙе мине эргәһендәге буш урынға саҡырып алды. Сал сәсле, танауына төшөрөп күҙлек кейеп алған был әбей бәйләм бәйләп ултыра ине. Ҡарап торам да, хәс тә ҡойоп ҡуйған Баймаҡ, Әбйәлил әбейе инде. Беҙҙең Буранғол ауылында тап шуға оҡшап торған Хәсби инәй бар ине. Һөйләшеп киттек, ул Чикагола йәшәгән улы менән килене янына китеп бара икән. Кәрзинендәге күстәнәстәрен күрһәтә башланы: "Бына, - тигән була, - ейәнемә йөн ойоҡ бәйләнем. Тик хәҙерге йәштәр уны үҙ итмәй, кеше араһында кейергә оялған була. Ә был бит аяҡҡа шундай йылы, йомшаҡ". Бер тәүлек тирәһе уның менән бер туҡтауһыҙ һөйләшеп барҙыҡ һәм миңә, әйтерһең дә, башҡорт өләсәйе менән китеп барған кеүек тойолдо. Унда ла шул уҡ башҡорт психологияһы ярылып ята. Минеңсә, театр милли рухлы булырға, әммә төрлө йүнәлештәргә асыҡ булырға тейеш, юғиһә, ул артта ҡаласаҡ. Бөгөн йәш башҡорт тамашасыһы алға китеп, театр артта ҡалһа, ул театр әһәмиәтен юғалтасаҡ. Шуға ла беҙ тамашасынан ярты аҙымға алдараҡ барырға тейеш.

## Төркиә тамашасыһын яуланыҡ

Апрель айында беҙ Төркиәнең Конья ҡалаһында үткән "Мең һулыш һәм бер тауыш" тип аталған Халыҡ-ара фестивалдә йөрөп ҡайттыҡ. Унда бик күп төрки телле театрҙар ҡатнашты. Беҙ "Шәүрәкәй" спектаклен бер актта күрһәттек. Башта артистар үҙ геройҙары менән төрөк телендә таныштырып сыҡты. Был спектаклдең айышына төшөнөү өсөн эшләнде. Ә спектакль үҙе башҡорт телендә ҡуйылды, фестивалдең шарты буйынса ла һәр милли театр үҙ телендә сығыш яһарға тейеш ине. Беҙҙең артистар, бигерәк тә йәштәр, беҙҙең телде аңламаҫтар, спектаклде дөрөҫ ҡабул итмәҫтәр, тип ҡурҡҡайны, әммә барыһы ла көтөлмәгәнсә яҡшы булды. Театрҙың үҙ теле бар бит ул, мин уға йылдан-йыл инана киләм. Уҙған йыл "Алтын битлек" фестивалендә "Кәкүк ояһы" спектакле менән сығыш яһағанда рус тамашасыһы беҙҙе диҡҡәт менән ҡарағайны. Был юлы ла халыҡ беҙҙе хәрәкәттәр аша аңлап, спектаклде ихлас алҡыштарға күмде. Тамашасы менән бәйләнеш булдырыу мөһим, ул энергия, моғайын да, артистарҙың күңеленән, күҙҙәренән сыҡҡан нур аша барлыҡҡа киләлер ул.

Ойоштороусылар беҙҙе бик ныҡ оҡшатты, киләһе йылға тағы ла мотлаҡ саҡырасаҡтарын әйттеләр. "Шәүрәкәй" спектаклендә йолалар бик күп күрһәтелә, шуныһы менән ул төрки тамашасыһына ҡыҙыҡлы һәм яҡын булды. Төрөктәр беҙҙең театр менән хеҙмәттәшлек итергә тәҡдим яһаны, мине үҙҙәренә спектакль ҡуйырға саҡырҙылар.

Был фестиваль бүтәндәрҙән шуныһы менән айырыла: унда урындар бирелмәй һәм ул дөрөҫ тә, сөнки һәр бер театр үҙ халҡының традицияһын күрһәтә һәм үҙ ерлегенән сығып уйнай. Тап шуға ла кемгәлер беренсе, кемгәлер икенсе урын биреү - ул субъектив ҡараш булыр ине. Театрҙар урындар буйынса баһаланмағанға күрә лә был фестивалдә дуҫтарса мөнәсәбәт, ижади мөхит барлыҡҡа килде. Һәр театр коллективы берберәһенең спектакленә ихлас йөрөнө, алҡыштарын йәлләмәне. Һәр көн кисен делегация урынлашҡан ҡунаҡхананың беренсе ҡатындағы холда театр артистары үҙҙенең милли йырҙарын, көйҙәрен, бейеүҙәрен башҡарҙы. Беҙҙең ҡыҙҙар башҡорт йырҙарын ҡурайға йырлаған ваҡытта сит ил вәкилдәре уларҙы видеоға төшөрөп, хәлдәре бөттө. Бындай сара үткәрелеүе бөтә халыҡ өсөн дә ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булды. Күптәр беҙҙең спектаклдән һуң башҡорттар менән милләт булараҡ ҡыҙыҡһына башланы.

Конья ҡалаһында Ҡаҙағстандан Солтан тигән егет уҡып йөрөй ине. Ул шул тиклем беҙҙең театрға ғашиҡ булды. Гел беҙҙең янда булды. Беҙ ҡайтыр саҡта беҙҙең янға инеп, рәхмәт әйтте лә: "Бер ваҡытта ла ундай шат күңелле кешеләрҙе күргәнем юҡ ине", - тип илап сығып китте.

**Шулай итеп... "Беҙҙең театр артистары шуныһы менән айырыла, улар, әйтерһең дә, һуңғы тапҡыр сәхнәгә сыҡҡандай, образға инеп, күңеле менән бирелеп китеп ихлас уйнай, ә ҡайһы бер милли театрға күҙ һалһаң, ундағы артистар аҡыл менән һәүетемсә генә уйнай, артыҡ көс һалыу күҙәтелмәй", - тигәйне режиссер Төркиәләге фестиваль тәьҫораттары менән уртаҡлашҡанда. Әлеге әңгәмәнән һуң мин Айрат Әхтәм улының үҙендә лә һөнәр башҡарыусы режиссерҙы ғына түгел, ә үҙ хеҙмәте, тормошта тотҡан урыны менән кешелекте яҡтылыҡҡа әйҙәргә, өмөт саҡтыһы уятырға, яҡшы сифаттар тәрбиәләргә ынтылыусы тәрбиәсене күрҙем. Айрат Әхтәм улының тышҡы ялтырауыҡтан, матди төшөнсәләрҙән йыраҡ тороуы, кешелекте эске донъяһы, рухиәте аша баһалаған ябайлығы һәм ихласлығы һоҡландырҙы. Һәм тағы ла: Айраттың әлифбанан тормош һабағына илтеүсе күпере ошо ерлектә ныҡлы булып ҡалыуын теләге килә.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА**
**яҙып алды.**

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЯУЫЗЛЫҠТЫ АЛЛА ТЫУҘЫРМАҒАН!

Университет профессоры студенттарына шундай һорау бирә:

- Был донъялағы бөтә нәмә Алла тарафынан яратылғанмы?

Бер студент ҡыйыу ғына яуаплай:

- Эйе, Алла тарафынан яратылған.

- Бөтә нәмә лә Алла тарафынан яратылғанмы? - тип ҡабатлап һорай профессор.

- Эйе, сэр, - тип яуаплай студент.

Шунан профессор былай ти:

- Бөтә нәмә лә Алла тарафынан яратылған икән, тимәк, яуызлыҡты ла Алла тыуҙырған. Беҙҙең ғәмәлдәребеҙ беҙҙең үҙебеҙҙең булмышыбыҙҙы ла сағылдыра, тигән принципҡа ярашлы фекер йөрөтһәк, тимәк, Алла - ул яуызлыҡ.

Бындай һүҙҙәрҙе ишетеп, студент шымып ҡала. Профессор Аллаға ышаныуҙың миф икәнлеген тағы бер тапҡыр студенттары алдында иҫбатлай алыуы менән бик ҡәнәғәт ҡала.

Шул саҡ икенсе бер студент ҡул күтәрә һәм һорау бирергә теләүен әйтә.

- Әлбиттә, һорағыҙ, - ти профессор. Студент урынынан тора һәм былай тип һорай:

- Профессор, һыуыҡ бар нәмәме?

- Ул ниндәй һорау тағы? Әлбиттә, бар. Һиңә бер ваҡытта ла һыуыҡ булғаны юҡмы ни?

Студенттар теге егеттең һорауынан көлә башлай.

Егет артабан шулай яуаплай:

- Асылда иһә, сэр, һыуыҡ юҡ ул. Физика законддарына ярашлы, беҙ һыуыҡ тип иҫәпләгән нәмә - ул ысынында йылылыҡтың юҡлығы. Кешене йә берәй әйберҙе уның энергияға һәм уны тапшырыу һәләтенә эйә булыуына ҡарап өйрәнергә була. Абсолют ноль (Цельсий буйынса минус 273 градус) - ул йылылыҡтың, ғөмүмән, булмауы хаҡында һөйләй. Бындай температурала бөтә материалдар ҙа ҡатып ҡала һәм һиҙгерлеген юғалта. Һыуыҡ тигән нәмә асылда юҡ ул. Беҙ был һүҙҙе беҙгә йылылыҡ етешмәгәндә ниндәй хәлдә булыуыбыҙҙы әйтер өсөн уйлап сығарғанбыҙ.

Студент дауам итә:

- Профессор, ҡараңғылыҡ бар нәмәме?

- Әлбиттә, бар, - ти профессор.

Студент яуап бирә:

- Һеҙ тағы ла хаҡлы түгел, сэр. Ҡараңғылыҡ та үҙенән-үҙе хасил булған күренеш түгел. Ысынында иһә, ҡараңғылыҡ - ул яҡтылыҡтың булмауынан барлыҡҡа килә. Беҙ яҡтылыҡты өйрәнәбеҙ, ләкин ҡараңғылыҡты түгел.

Беҙ аҡ яҡтылыҡты төрлө төҫтәргә теҙеп һалыу һәм һәр бер төҫтөң тулҡын оҙонлоғон өйрәнеү өсөн Ньютон призмаһын файҙалана алабыҙ. Ләкин ҡараңғылыҡты һеҙ үлсәй алмаясаҡһығыҙ. Ябай ғына яҡтылыҡ нуры ҡараңғылыҡ донъяһына бәреп инә һәм уны яҡтырта ала. Теге йәки был арауыҡтың күпмегә ҡараңғыраҡ булыуын үлсәп буламы һуң? Яҡтылыҡтың күпме күләмдә бирелеүен үлсәргә мөмкин. Ә ҡараңғылыҡ тигән төшөнсәне кеше яҡтылыҡ булмаған күренеште атау өсөн файҙалана.

Ниһайәт, был йәш кеше профессорға тағы бер һорау бирә:

- Сэр, ә яуызлыҡ бармы?

- Әлбиттә, мин бая әйткәйнем инде, беҙ уны көн дә күрәбеҙ, - тип икеләнеберәк яуап бирә профессор. - Кешеләр араһындағы аяуһыҙлыҡ, донъялағы енәйәттәр һәм көс ҡулланыу - быларҙы яуызлыҡ күренештәре тип әйтеүҙән башҡа сара юҡ.

Студенттың был юлы ла яуабы әҙер була:

- Яуызлыҡ юҡ ул, сэр, йәки һуңғы сиктә ул үҙенән-үҙе хасил булмай. Яуызлыҡ - ул Аллаһыҙлыҡ билдәһе. Ул әлеге һыуыҡ менән ҡараңғылыҡҡа оҡшаған. Яуызлыҡты Алла тыуҙырмаған. Яуызлыҡты яҡтылыҡ һәм йылылыҡты кәүҙәләндергән инаныу һәм һөйөү төшөнсәләре менән сағыштырыу мөмкин түгел. Яуызлыҡ - ул кеше йөрәгендә Илаһи һөйөүҙең юҡлығы һөҙөмтәһе. Ул да йылылыҡ булмағанда килеп тыуған һыуыҡ йәки яҡтылыҡ юҡ саҡтағы ҡараңғылыҡ кеүек.

Профессор яй ғына урынына ултыра. Йәш студенттың исеме Альберт Эйнштейн була.

**Рәсүл СӘҒИТОВ - Башҡортостан радиоһы журналисы. Ижтимағи-сәйәси тапшырыуҙар алып бара, күп сериялы радио- һәм телевизион документаль фильмдар эшләй. Республиканың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты. Белеме буйынса - филолог һәм юрист. Әҙәби ижадҡа ла ваҡыт таба. Ике проза китабы авторы. Һуңғы йылдарҙа хикмәтле хикәйәләр яҙыу менән ихлас шөғөлләнә. Шуларҙың бер нисәһен уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**



# КӨСЛӨНӨКӨ - ЗАМАНА

Еңгәм ҡаҙ себештәренең берәһенә көлдәк тегеп кейҙергән.

Аптыраулы-һораулы ҡарашыма ул, ғәҙәтенсә, тыйнаҡ ҡына йылмайҙы ла:

- Талайҙар, - тип яуапланы.

Аңлашыла-а-а: тимәк, себештәр себеште һыйҙырмай. Анауы берәүһенең муйын тирәләре, түбәһе яланғасланып киткән шул... Дә-ә-ә... михнәтте иртә күрә башлаған, мәхлүҡ.

- Айырым һауытҡа урынлаштырып ҡараманыңмы?

- Дөрөҫ булмай... Инкубаторҙыҡылар бит, коллектив булып тупланып үҫергә тейештәр.

- Тик ул коллектив ситләтә бит әле үҙен...

- Шулай шул...

- Нинә икән? Ауырыумы әллә?

- Юҡ шикелле былай. Унығын ҡайҙан беләһең инде, алыуыбыҙға ике көн генә бит әле. Кышшш... кшшш...

Хужабикә иплəп кенә һарыҡайҙарҙы ситкә этәрә, көлдәклене яҙмыш елдәренән араларға тырыша:

- Ай, ай... Ярама-а-й.

Ҡара-ҡара, мәхлүкте көлдәге аша ла суҡып маташалар!

Берәүҙе йәлләп, икенселәрҙе әрләп ултыра бирәбеҙ. Шул саҡ күҙгә икенсе бер мөйөштәге хәүефле хәл салына.

- Еңгә, анауы берәүһен дә үгәйһетәләр түгелме?

- Шулай шул...

- Бәлкем, уларҙың да, бәндәләрҙеке ише, холҡо булалыр?

- Була, булмаған ҡайҙа.

- Былар йыуашмы инде?

- Шулайҙыр.

- Ә, бәлкем, тыйнаҡтарҙыр, тәүфиҡлы, тәрбиәлеләрҙер?

- Әллә инде...

- Әгәр шул икәүҙе айырым тотһаң... Бәләкәй булһа ла коллектив була бит...

- Беренсенән, барыбер ҙә ярамай.

- Икенсенән?

Еңгә сипылдап суҡырға һонолопмы-һонолған бер әрһеҙҙе һаҡ ҡына ситкә этәрҙе лә:

- Икенсенән, шулайтып ҡараным инде, - тине. - Көслөрәге көсһөҙөрҙөрөгөн таларға тотондо...

Бүреләр өйөрөндә бүре, ә иң һәйбәте - арыҫлан булһаң ғына именһеңме инде?



# БАУҘА ЭТМЕ, БАБАЙМЫ?

Инкештәй генә эт ишаратын муйынынан бауға таҡкан бабай баҙар буйлап бара. Буйға мөшкөл кешеләр генә түгел, буйға бәләкәй эттәр ҙә тормошта иҫ киткес өлгөр булалар улар. Был йөнтәҫ тә сөм-ҡара "нано-танауын" он тоғона ла ағартты инде, үтеп барыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаңһыҙ муҡсайҙарына үрелеп тә әрләнде, Штирлицтыҡы ише ҡап-ҡараға төрөнгән һаҡсынан шелтә лә ишеттеләр. Ишеттеләр тигәс тә, хужа тиргәлде инде. "Инкештен" бәндәләр һүҙендә эше юҡ. Ул үҙен дәүләт кимәлендәге мөһим бер эш буйынса эҙ буйлап китеп барғандай тоя. Тойоп ҡына ҡалмай - тота ла: тыштан шулай күрһәтергә ныҡ тырыша.

Әҙәм балаһы көнөнә илле миллион самаһы күҙәнәген ҡоя, имеш. Эттәр еҫте ана шул күҙәнәктәр буйынса таба, тиҙәр. Хәйер, баҙарҙа ана күпме тығылыш - күҙәнәктәр бында күберәк, күпкә күберәк ҡойолалыр. Беҙҙең "нанопродуктһың" эҙ буйлап барғаны ла, айһай, икеле. Барған хәлдә лә - ул ғына танауы менән бындағы нисәмәләгән еҫ араһында аҙашып ҡалыр ине.



Дөрөҫө шул: бабай этте алып китеп бармай ул, эт бабайҙы бауға бәйләгән дә, һөйрәтеп бара.

Хужа ыҫпай ғына кейенгән. Кем әйтмешләй: өҫтө, ныҡ яңы булмаһа ла, йыуылған, үтекләнгән. Атлаш-килбәтенә диҡҡәтләп ҡараһаң, шәп саҡтарында ҡара эштә эшләмәгәнен сырамытырға була.

Йөнтәҫ йүгерек, өйөлөп яткан төргәктәргә төртөлөп, фырт та фырт килә башлағайны, эйәреп барыусы тәрбиәле, ап-аҡ, хатта артыҡ аҡтыр әле, ҡулы менән епте үҙенә тарта төштө лә:

- Теймә! Кәкәй! - тине.

Балаға өндәшкәндәй яңғыраны был.

Эргәләренән үтеп барған ике әхирәт пырхылдашып көлөп ебәрҙе.

Яй ҡуҙғала бабай.

Артыҡ ашыға бала.

# ДӨРӨҪМӨ БЫЛ, ЮҠМЫ?

–Әле яр-а-а-й, яйлап әҙәм рәүешенә инеп килә, - тине күрше. Уң яғындағы караүатта кәкерәйеп кенә яткан ҡураныс көүҙәле кешене күҙҙә тота ул. - Килгән көнөндә күрһәң һин уны-ы!.. Һарылыйәшелле бер нәмә ине.

- Тас лимон кеүек ине инде, - тип өҫтәне мөйөштән өсөнсө палаталаш.

- Килгән тиһегеҙ, килтереп ауҙарҙылар уны бында. Бынауында алтынсы итеп топчан һөйрәтеп индерҙеләр ҙә, ырғыттылар, - дүртенсе мөйөштән килгән тауыш шулай тип асыҡлыҡ индерҙе.

- Нимешләп шул хәлгә ҡалған һуң ул?

- Нимешләп булһын инде... Эсеп!

- Эсеү ни... кемдә юҡ?..

- Һун, был бит араҡынан түгел...

- Сәмәйҙәнме?

- Һы, сәмәй... Әләкһә әле ул... Теләһә ниндәй тәҙрә йыуғыс, бәҙрәф таҙалағыстар менән булашҡан.

- Ну... да-а-а... - шул урында ҡураныс көүҙә шундай ауаз бирҙе. Был ауаз менән ыңғай ҙа, кире лә мәғәнәне белдереп булғанын беләбеҙ. Әлегә асыҡ төшөнөлмәй - ике һүҙе араһына ыңғырашыуын өҫтәп бутаны. Йоҡлаймы, тиһәләр, ишетеп ята икән дә. Телде лә арыу ғына аңлай, бактиһән. Хәйер, бындайҙар, тормоштоң төрлө яҡтарын, күберәк тиҫкәре тарафтарын күргәндәр, беләбеҙ, шулай лөғәткә лә оҫта булалар.

Ҡураныс көүҙәнең "Ну, да-а-а..."һы, бына аңлашылды, хуплау түгел икән:

- Ванна... таҙартҡыс... эстем. Унығын да белмәйенсә генә...

- Нисек инде белмәнең?

- Шулай... Белмәнем и все... - тегенең тауышында, ҡара-ҡара, үпкәләү ауаздары ла аңғарылғандай әле ул... Ошоғаса нимә генә тиһәләр ҙә ҡаршы яуапламай торғайныҡ.

- Корешыма барһам, теге ләх ята. Күрәм: полторашка шешә ултыра, - үпкәләһә лә тарихын тағатып бөтөргә булды ахырыһы был. - Сәмиғулла тип уйлайым. Эстем. Оло стаканды төп күтәрә бәрҙем. Шунһыҙ һис әмәл дә юҡ ине шул, кисәгенән һуң иртәнге хәлдең нисек икәне үҙегеҙгә мәғлүм...

Шулай тигәнендә "тарихсы" йылт итеп тыңлаусыларға ҡарап алды. Хуплау әҙләнә. Хәбәргә мут кешеләр, ғәҙәттә, тап шулай итә бит, үҙен нәҡ улар һымаҡ уҡ кеше итеп күрһәтергә тырыша.

Йөплəүсе лә, ғәйепләүсе лә табылманы. Береһе лә "Әллә инде..." мәғәнәһендә яурын да һикертмәне. Табылмаһа ла туҡтау юҡ инде, иптәштәр! Ул һөйләп бөтөргә тейеш, уға кеше араһына сыға башлау фарыҙ:

- Йотоп та бөттөм, ауыҙҙы асып ҡатып та ҡалдым, әй...

Һөйләүсе йәнә тыңлаусыларҙы төпкә батҡан һап-һары күҙҙәре менән байҡап алды. Улары тағы быны йөлләмәне лә, “батырлығына” һоҡланманы ла.

- Теге ни әллә ниндәй бер хәшәрәт булып сыҡты ла ул!..

Бына быныһын артыҡ шаштырып ебәрҙең! Ундай әшәке эсемлектәрҙе яңылыш ҡына түгел, ә үҙ теләгең менән дә йыш түңкәргәнеңде һиҙә ул халыҡ, тойомла-а-а-й...

Халыҡ йәнә шуға ла диҡҡәт ҡылды - һаман һүҙсәнләнә бара бит был асарбаҡ.

- Тамаҡҡа һәйбәт бит, - тип ҡуйҙы төпкә карауат хужаһы, һоралмаған ошо һорауға яуап биреп.

Ебәрә шул теге!.. Үҙенә тейешле ризыҡ менән генә хушһынмай. Һалғандарын тиҙ генә ҡабып ҡуя ла, һауытын тотоп, тағы ашханаға китә. Палаталаштары тегенең тап шул тарафҡа сыҡҡанда бер ҙә тәнтерәкләмәгәненә лә диҡҡәт ҡыла. Һай, ышанылыс баҫа!

Башҡалар дауахана аҙығын бик хушһынмай, йә тоҙһоҙ, йә тәмһеҙ тип сирыла. Туған-тумасалары килтергәне лә мул бит. Ашалмаған аҙыҡ ашаусыға тәҡдим ителә. Уға бит берәү ҙә килмәй, килтермәй. Унығы былай бер ваҡытта ла теләнселәмәй. Ашханала, эйе, һорай, ә бында - юҡ. Шуның менән бергә бирелгәндән һис ҡасан баш та тартмай. Йәнәһе, ул - һораныусы түгел, үҙегеҙ биргәс, мин ғәйепле түгел, алам, ашайым... Ошо яҡлап ҡарағанда унын, үҙе ҡупайғандай раҫлауынса, төрмәлә ултырғанына ышана яҙып та ҡуйыла. Тап шул ирекһеҙҙәр араһында әлеге яҙылмаған ҡанун барлығы билдәле бит. Юғиһә, ун ете йылым шунда үтте, тиғененә көлөп кенә ҡарайҙар ине башта. Үҙенә мәртәбә өҫтәү өсөн яһап һөйләй, тип кенә баһаланды. Яһалмалылыҡ юҡ та түгел шул:

Кеше биргән ризыҡты шунда уҡ һоғона башламай. Тумбочкаһына ултырта. "Аҙағыраҡ..." - тип мығырҙай.

...Көндәр үтте. Быға күҙ алдында тиерлек төҫ инә, ит ҡуна башланы. Тауышы ла көрәйә төштө. Хәҙер инде кәкерәйеп ятмай. Хәҙер инде салҡан төшөп, ҡулдарын ҡушарлап башы аҫтына һалып, һуҙылып ята.

Палаталаштары унын бер ниндәй документһыҙ бындә икәнен белә. Үҙе әйтеүенсә, бында "Тиҙ ярҙам" арҡаһында ғына килеп эләккән. Төрлө тарихтарҙы бәйәнләй. Ғәжәп, ошоғаса төрттөрөүҙәрҙе "Ну, да-а-а..." тип кенә үткәреп ебәргән кеше хәҙер ҡаршы ла өндәшә. Йәнәһе, мине ул хәтлем кемгә һанайһығыҙ?.. Тора-бара хатта ул үҙен өҫтөн дә ҡуйғандай тойола башланы.

- Тән көсө самалы булғанға ғына баҫалҡы ҡыланған ул, - тип һығымта яһаны күрше. - Ә йән көстәре уларҙа мул була. Ундайҙарға шуға күрә әллә ни ирек бирмәҫкә кәрәк.

- Теҙген бушамаҫҡа тейеш. Шундайҙар алғырлыҡ алып китһә, ни була һуң?..

Дөрөҫтө лә әйтте кеүек абзый, дөрөҫ түгелде лә...

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# ПИОНЕРҘАР ҺЫРА ЭСМӘНЕ,

## тәмәке лә тартманы…





**Элек 19 майҙа Пионерҙар көнөн байрам итәләр ине. Пионерҙар ойошмаһының уҡыусыларҙы тәрбиәләүҙәге ролен бөгөнгө йәштәр аңлап та бөтмәй. Шуға ла байрам алдынан йәш быуынды тәрбиәләүгә бар ғүмерен арнаған элекке "пионерҙар"ҙы әңгәмәгә саҡырҙыҡ. Шулай итеп, Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының тәрбиәүи эштәр буйынса директор урынбаҫары Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы МӘҠСҮТОВА һәм Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының өлкән тәрбиәсеһе Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы БӘХТИӘРОВА мәктәп тәрбиәһенең ниндәй булырға тейешлеге тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

● **Үҙегеҙ ҙә шул осорҙа эшләгән уҡытыусылар булараҡ, элекке пионер ойошмаларының баланы тәрбиәләүҙәге ролен нисек баһалайһығыҙ?**

**Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы:** Өлкән быуындың был ваҡытты һағынып иҫкә алыуы бушҡа түгел. Бер ойошма булып, бер үк маҡсатҡа ынтылып йәшәү шул тиклем күңелле була торғайны.

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Мин хеҙмәт юлымды Шишмә районында мәктәптә вожатый булып башланым. Уҡыусылар менән фермаға ла бара инек, боҙ шыуырға ла төшә инек, бигерәк тә пионерҙар көнө күңелдә матур булып һаҡланып ҡалған. Ауылдың ситендә бейек итеп усаҡ яға инек, бөтә ауыл өсөн был көн һабантуйҙан да күңеллерәк байрам булыр ине. Бында отрядтар араһында уҡыу йылы дауамында барған ярыштарға йомғаҡ яһала, ошо сарала ауыл халҡы, ата-әсәләр балалар тәрбиәләүҙә мәктәптең роле ҙур булыуын күрә ине. Ул саҡта бит балаларҙы ҡыҙыҡтыра ла беләләр ине, мәҫәлән, төрлө ярыштарҙа, уҡыуҙа алдынғылыҡты бирмәгәндәргә мотлаҡ бушлай сәйәхәттәр ойошторола ине. 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына эшкә килгәс, уҡыусыларым менән Дим, Ағиҙел йылғалары буйлап сәйәхәттә лә, Ырымбур өлкәһенең башҡорт ауылдарында ла, Төньяҡ Осетияла ла булдыҡ. Былар барыһы ла уҡыусыларҙа яҡшы уҡырға, тәртипле булырға, ололарға мәрхәмәтле булырға ынтылыш уята ине.

**Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы:** Аҡылдарҙа, ысынлап та, пионер ойошмаларының эше әүҙем була торғайны шул. Тимур командаларын ғына иҫкә алығыҙ. Оло инәйҙәргә, бабайҙарға, бигерәк тә яңғыҙ, ярҙамһыҙ ҡалғандарға ярҙам итеү көслә булды. Иҙән йыуыу, һыу килтереү кеүек эштәрҙе башҡара инек.

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Шуныһы ҡыҙыҡ, балалар утын бысыу, ярыу кеүек эштәрҙе ололар күрмәгәндә лә эшләй һалып китә ине. Ҡалала ла ветерандарҙы шефлыҡҡа ала инек. Бөгөн йорт эштәрен социаль хеҙмәткәрҙәр хеҙмәт хаҡына, ә утын бысыу, ярыу кеүек эштәрҙә типһә тимер өҙөрлөк егеттәр бер яртыға башҡара.

●**Донъялар үҙгәреп китеп, нисәмә быуын тәрбиәләнгән бындай ойошмалар юҡҡа сыҡты, ә мәғариф өлкәһе яңынан-яңы тәжрибәләр үткәреү яланына әүерелде. Ошо күренешкә һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Бөгөнгө мәктәп уҡытыусыһына уҡыусыларҙы тәрбиәләүҙә нимәләр ярҙам итә?**

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Заманалар ҙа, идеялар ҙа үҙгәрә, етәкселәр ҙә алышынып тора, тик балалар тәрбиәләү менән шөғөлләнгән мәктәптә, айырыуса тәрбиә эшендә үҙгәртеп ҡороуҙар, ниндәйҙер тәжрибәләр кәрәкмәҫ ине. Ҡоролоштар алышынһа һуң, пионер ойошмаһы бит етәкселек итә торған орган түгел, уның төп маҡсаты – баланы тәрбиәләү.

Мәктәпте тәжрибәләр яланына әүерелдерергә ярамай. Һәр замандың үҙенең талабы һәм матурлығы бар. Бөгөнгө уҡыусылар күберәк белә, улар төрлө гәзит-журналдар уҡый, интернеттан ниндәйҙер мәғлүмәт ала, тимәк, улар кинерәк белем даирәһенә эйә. Шул уҡ ваҡытта бала һәр осорҙа ла бала булып ҡала, шуға ла элекке тәрбиә алымдарынан да ваз кисергә ярамай. Замананың белемле уҡыусыһының белемен тағы ла камиллаштырыу өсөн түңәрәктәр ҙә, төрлө осрашыуҙар ҙа, сәйәхәттәр ҙә бик кәрәк.

**Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы:** Мәктәптәрҙәге түңәрәктәр юҡҡа сығыу өҫтөндә. Ә түңәрәктәр бөтһә, уҡыусылар тағы урам тәрбиәһенә тороп ҡала, сөнки төрлө урындарға махсус түңәрәктәргә йөрөргә барыһының да мөмкинлеге юҡ. Бала ҡайҙалыр шөғөлләнһен өсөн атай, әсәй йәки олатай, өләсәй уны йөрөтөргә тейеш була, ә бөгөнгө ата-әсәләр көнө буйы эштә. Улар балаһының нимәгә һәләтле икәнен дә белмәҫкә мөмкин.

Төрлө түңәрәктәрҙе, оҙайтылған көн төркөмдәрен ҡыҫҡартыу аҡсаға бәйләп аңлатыла, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бала илдең киләсәге, тип ҡаралмай. Элек һәр синыфтың айырым тәрбиәсеһе була торғайны, ул бит дәрес әҙерләтеп кенә ултырмай, балалар менән саф һауаға ла сыға, саралар ҙа үткәрә. Былар барыһы ла бөтөрөлөү өҫтөндә. Миненсә, лагерь системаһын да киңәйтеү кәрәк. Элек студент саҡта йәйге лагерҙа практика үтә торғайныҡ, һис юғы, шуны тергеҙеү мөһим. Был студентта яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләү йәһәтенән дә яҡшы булыр ине.

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Бөгөн бар система нисек күберәк аҡса эшләргә мөмкин, тигән принципҡа ҡоролған, мәғарифҡа, йәштәргә иғтибар юҡ. Ҡайҙан аҡса күп килә, уларға йәшел юл асыҡ. Мәктәп аҡса эшләү урыны түгел. Күп яҡлы тормоштоң ҡайһы ғына мөйөшөнә бәрелһәң дә аҡсаға бәйле, ә баланың яҙмышы "тормош" тигән ҡатмарлы геометрик фигураның эсендә бикле ҡала, уны берәү ҙә күрмәй. Барыһы ла "аҡсалы мөйөш"кә иғтибар итә, уны өйрәнә, тикшерә, ә балаға иғтибар юҡ кимәлендә.

●**Мәктәптәрҙә ауыр холоҡло, тәртип боҙоусы балалар менән махсус белемле, әҙерлекле психолог, социаль педагогтар эшләй. Пионер ойошмаһы бар саҡта, уларҙың ролен кем башҡара ине? Ни өсөн хәҙер бындай "ауыр" балалар күбәйә?**

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Был барыһы ла ата-әсәнең балаһына иғтибары етмәүе, баланың күберәк урам тәрбиәһе алып үҫеүе менән бәйле. Шуға иғтибар итегеҙ: меңгә яҡын баланы бер психолог тәрбиәләй алмай. Ул ниндәйҙер дәрестәр үткәреп, махсус белеме булмаған тәрбиәсегә ярҙам итергә генә тейеш. Ә пионер ойошмаһында баланы коллектив тәрбиәләй, уға алдамы, арттамы, урталамы, тигәндәй, үҙенең урынын табырға ярҙам итә ине. Бала шуны аңларға тейеш: өйҙә ата-әсә, туғандарың, ә мәктәптә синыфың – коллектив. Пионер ойошмаһы ла – коллектив. Был коллективта бала үҙенең урынын таба белергә өйрәнә. Элек етәксе кешене белеү өсөн иң тәүҙә уның коллективтағы роленә, ундағы үҙара мөнәсәбәткә иғтибар итһәләр, хәҙер уның хеҙмәткәрҙәренә аҡса түләй аламы икәнен тикшерәләр. Барыһы ла аҡса үлсәме менән үлсәнә.

**Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы:** "Берәү – бөтәһе, бөтәһе – берәү өсөн" тигән девиз менән йәшәй торғайныҡ. Яҡшы уҡыған бала насарыраҡ уҡығанына ярҙам итә, сөнки бер ялҡау өсөн бөтә коллективҡа ҡыҙарырға тура килә. Һыра эскән берәй уҡыусыны табырһыңмы! Мәктәптә тәмәке тартып ҡара әле! Былар барыһы ла ғәҙәттән тыш хәл ине. Йыш ҡына отряд йыйылыштары үтә ине, бында тәртип, уҡыу ғына тикшерелмәй, ә ниндәйҙер әҫәр буйынса һөйләшеүҙәр, фекерләшеүҙәр ҙә була торғайны. Былар барыһы ла уҡыусыны фекерләргә лә, хыялланырға ла өйрәтә ине. Яҡшы эшләгән, матур йәшәгән кешеләр өлгө итеп ҡуйыла, барыһы ла уларға оҡшарға ынтыла ине.

**Фәриҙә Әхмәҙулла ҡыҙы:** Балаһы, әлбиттә, өйҙә, лә мәктәптә лә тәрбиәләйҙер, шулай ҙа ул ниндәйҙер дөйөм коллективта ла үҙенең урынын күрә белергә тейеш. Беҙҙең илдә әсәй кеше балаһы менән өйҙә, иң күбендә, өс йәшкә тиклем ултыра ала. Шуға ла баланы мәктәп тәрбиәләргә тейеш була, ата-әсә уға ышана. Тик тәрбиә усағы мәктәп булып ҡалған шикелле, уҡытыусыларҙың да ролен үҙгертергә, илдә татыулыҡ, матурлыҡ, етешлек булһын өсөн мәктәптә балаларға иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк. Тап парта артында бала үҫә, бөтә яҡлап үҙен аса. Кемдеңдер артынан эйәреп йөрөп кенә үҫешеп булмай, ул башҡалар алдында үҙенең һүҙен дә әйтә белергә, һәләттәрен түңәрәктәрҙә камиллаштырырға, үҙенә яуаплылыҡ алып өйрәнергә тейеш, уға үҙенең урынын табыу өсөн пионер ойошмалары кеүек ойошма барыбер кәрәк.

**Менәүәрә Әбделхай ҡыҙы:** Балаға "Эсмә, тартма", тип кенә уны был яман ғәҙәттәрҙән аралап булмай. Бөгөн беҙҙең мәктәптәге төп бурыс – уларға тормоштоң яҡшы яҡтарын күрһәтеп, матур саралар үткәреү, матурлыҡ аша тәрбиәләү. "Шаяниум", "Серле йондоҙҙар", "Урал батыр" эпоһын яттан һөйләү фестивале, шулай уҡ мәктәп менән киноға, спектаклдәргә йөрөү ҙә ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Өфөләге башҡорт мәктәптәре бер-береһенә дуҫлыҡ күперҙәре һуҙа башланы.

Ойошма булмаһа, балалар үҙара ойоша башлай, үҙ аллылыҡ тәртипһеҙлеккә, бәйһеҙлеккә килтерә. Ошолар булмаһын өсөн ойошма кәрәк тә инде. Эш бит исемдә генә түгел. Беҙҙең гимназияла хәҙер пионер ойошмаһы булмаһа ла, "Иман" йәштәр ойошмаһы әүҙем эшләп килә. Уны иманлы булайыҡ, үҙебеҙҙең милләт ҡыҙҙары һәм егеттәренә хас булған тәрбиәлелек, басалҡылыҡ ҡайтһын, тип "Иман" тип атаныҡ. Халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты булһын өсөн балалар баҫылып үҫергә лә, шул уҡ ваҡытта тотанаҡһыҙ булырға ла тейеш түгел. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп эшләргә тырышабыҙ, ойошма ағзалары гимназияның барлыҡ сараларын үткәрергә ярҙам итә, улар беҙҙең төп ышанысыбыҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

**Шулай итеп…**

**Нисек аталыуына ҡарамаҫтан, пионер ойошмалары кеүек, балаларҙы бер ҡорға йыйған, бер маҡсат менән ынйырға өндәгән, уларҙы коллектив эсендә йәшәргә өйрәткән ниндәйҙер ойошма кәрәк, тигән һығымта яһаны ҡоробоҙҙа ҡатнашыусы тәрбиәселәр. Эйе, ниндәй генә тәжрибәләр үткәрелмәһен, ниндәй генә реформаларға дусар ителмәһен, мәғариф өлкәһендәге тәрбиә барыбер ҙә традицияларға нигеҙләнергә тейеш. Ә беҙҙең традициялар насар түгел ине. Пионер, комсомол тәрбиәһен дә беҙ үҙебеҙҙән тәжрибәнән һыҙып ташларға тейеш түгелбеҙҙер.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# ЯУЫЗЛЫҠТЫ ЕҢӘМ, ТИЕП...

## яуызға әйләнмә

◆Кеше тәҙрәһендәге яҡты утҡа ҡыҙыҡма, үҙ өйөңдәге һуҡыр шәмең һүнмәһен.

◆Яуызлыҡты еңәм, тип, айҡашма, үҙең дә яуызға әйләнеүең бар: уны оло аҡыл менән юҡ итергә тырыш.

◆Башҡаларҙы ышандырыу өсөн үҙең ышанғанды ғына һөйлә.

◆Күңелеңде ауыҙлыҡлап ҡына тор, сөнки ул нимәгәләр, кемгәләр эйәрергә генә тора – бәндәне аҙаштыра, аҙҙыра, хилаф эштәр эшләтә.

◆Һандуғасмын, тип маҡтанма, ҡоҙғондоң да һайрар сәғәте була.

◆Һүҙ һөйләһәң, сәпкә тейҙер; тейҙерә алмаһаң, ике күҙең йәшен түгер.

◆Кешене йөҙөнә ҡарап маҡтама – ҡарғышҡа бәрәбәр ул.

◆Күмәктәр араһында кемгәләр айырып кәңәш бирмә – йөҙөнә һуғыу менән бер.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА-ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

(Дауамы. Башы 19-сы һанда).

# БАШҠОРТ БАЛЫ

**Ер йөҙөндә йәшәгән төрлө ҡәүемдәр тәүтормош заманынан уҡ бал ҡорттарын белгән һәм бал менән туҡланған. Египет папирустарында, ғәрәп дауалау белешмәләрендә, боронғо китаптарҙа, Ҡөрьәндә, Библияла һәм табиптарҙың, философтарҙың хеҙмәттәрендә балдың кеше һаулығы өсөн әһәмиәте, уны ҡулланыу буйынса кәңәштәр һаҡланған. Боронғо Египет пирамидалары һәм төрбәләре бында йәшәгән кешеләрҙең балды, прополисты им-дауа, йәнә боҙолоу-сереүҙән һаҡлау сараһы булараҡ файҙаланыуҙары тураһында һөйләй. Балдың бындай үҙенсәлектәрен Римдә йәшәүселәр ҙә белгән. Гладиаторҙар алыш алдынан бал менән ризыҡланып ҡөҙрәтләнгән.**

## Сәләмәтлек сихәте

Боронғо Грецияла бал ҡорттарын ҡарау, үрсетеү буйынса тәүге мәғлүмәттәр тупланған. Тәбиғәттең сәләмәтләндереү ҡөҙрәтен дауаланыуҙың нигеҙе итеп иҫәпләгән табип Гиппократ дауалау тәжрибәһендә балды киң ҡулланған. Мәшһүр философ Пифагор үҙенең оҙон ғүмеренең сере бал икәнен белдергән: "Эсегеҙҙе бал менән һуғарығыҙ", - тигән. Философ Демокрит та балдың сәләмәтлеккә һәм оҙон ғүмерлелеккә булышлығын раҫлаған. Ул бал болғанған һыуҙы нервыларҙы тынысландырыу һәм йоҡоно һәйбәтләү өсөн тәҡдим иткән. Гомерҙың "Илиада", "Одиссея" эпик поэмаларында Агамеданың яугирҙар өсөн тәмле бал эсемлеге әҙерләүе әйтелә. Боронғо Зевс тураһындағы мифта Кронос тарафынан үлемгә дусар ителгән бәпесте нимфалар мәмерйәлә һөткә бал болғап туйындырған.

Ғәрәптәр балды Хоҙай тәғәләнең тәғәме, әҙәмдәргә бүләге иҫәпләгән һәм ҡорт бағып, ошо изге тәғәм менән ризыҡланған. Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡәүемдәренә: "Бал ашағыҙ, һауығырһығыҙ", - тигән. Атаҡлы табип һәм философ Ибн Сина балды тәнде сәләмәтләндереүсе, ғүмерҙе оҙайтыусы ризыҡ вә им булараҡ тәҡдим иткән: "Әгәр йәшлегеңде һаҡлағың килһә, мотлаҡ бал аша. Ул тәнде нығыта, дәрт өҫтәй, аҙыҡты яҡшыраҡ эшкәртеүгә булышлыҡ итә, ашау теләге тыуҙыра. Бал аҡылды аса, телде үҫтерә". "Табиплыҡ фәне ҡануны" хеҙмәтендә Ибн Сина балды саф килеш һәм башҡа ризыҡтар менән ҡулланыу буйынса йөҙ илле тәҡдим әйтә. Мәҫәлән, ул балды гранат һуты менән йөрәк сирлеләрҙе дауалаған, ҡырҡ биш йәштән һуң балды даими рәүештә ҡулланырға һәм айырыуса грек сәтләүеге менән бергә туҡланырға тәҡдим иткән.

Туҡланыу тәғәме һәм дауаланыу сараһы булараҡ, бал Һиндостанда ла юғары баһаланған, тереклек ыуы менән ағыуланғанда ағыуға ҡаршы торорлоҡ им итеп ҡулланылған. Субтропик климатлы Палестинала, уның таугаяларында ла ҡырағай бал ҡорттары күстәре мыжғып торған, уларҙы эйәләштереп, ҡортсолоҡ шөғөлө тыуған. Боронғо һинд медицина трактатында (Аюверда) бал менән дауалау ентекләп яҙылған.

Бал - бик тә татлы, туҡлыҡлы, шифалы һәм диетик үҙенсәлектәргә эйә ризыҡ. Ул ашаған ашамлыҡты эшкәртеүҙе һәм үҙләштереүҙе һиҙелерлек яҡшырта. Икмәк, бутҡа, һөт, буҙа, ҡаймаҡ, май, эремсек, талҡан, ҡорот, торма, шалҡан, һуған, һарымһаҡ, кишер, сөтләүек, өрөк, йөҙөм, хөрмә, сейә, дунала, ҡарағат, гөлйемеш, ҡурай еләге, ер еләге, көртмәле кеүек бихисап аҙыҡ-түлек, еләк-емеш, йәшелсә менән дә бал бик файҙалы, баһалап бөткөһөҙ. Мәгәр һәр тәғәм һымаҡ, уны ҡулланғанда ла сама белергә кәрәк. Шуға тормоштан бер хәлде һөйләйек.

Атайым бал айырған мәлдә ауылыбыҙҙың ир-егеттәре берәр стакан шыйыҡ бал эскәндәре, һай, шәп булып ҡалды, тиеүҙәре хәтерҙә. Шулай бер көн "ауыл батшаһы" бригадир килеп инә лә: "Ағай, беләһең, мин ныҡ, донъяның тотҡаһы кеше. Эсер балыңды ете-һигеҙ сөңкә һал әйҙә, йәлләмә!" - ти. Ярамай, тиеүгә ҡарамаҫтан, эсә был. Шөбһәләнеп, атайым оҙата сыға. "Батша" күп тә бармай, атынан йығылып төшә, шунан аҙна буйы бер нәмә лә ашай алмай ята. Бал ғәйәт ҡөҙрәтле лә, туҡлыҡлы ла шул.

Әҙәм нәҫеле балды татып белгән дәүерҙән бирле ул - им-дауа сараһы. Шифаһы меңәр йылдар буйы һыналған һәм быны хәҙерге заман медицинаһы ла таный. Унда тереклек итеү, ҡанды байытыу һәм яңыртыу өсөн кәрәк булған иң мөһим микроэлементтар бар. Бал матдәләр алмашыныуын, тере күҙәнәктәрҙең үҫешен, эске органдарҙың, ашҡаҙан-эсәк юлының эшмәкәрлеген, тирене туҡландырыуҙы яҡшырта, йоҡоно һәйбәтләй, тәнгә көс-ҡөҙрәт өҫтәй, шеш ҡайтара, бактерияларҙы бөтөрә... Ололарға ла, йәштәргә лә, балаларға ла сихәтле. Балалар бал менән үҫеү өсөн кәрәк гормондар, микроэлементтар, ферменттар ала, бал ашаған үҫмерҙәр физик яҡтан һәм аҡыл йәһәтенән дә нығыраҡ үҫешә, алдымыраҡ була.

Балдағы виноград шәкәре (глюкоза), емеш шәкәре (фруктоза) кеүек органик берләшмәләрҙе организм еңел үҙләштерә һәм улар кешенең йәшәү эшмәкәрлеге өсөн кәрәк ҡеүәт сығанағы булып тора. Глюкоза мейегә ҡөҙрәт бирә, фруктоза менән лактоза йөрәк, нервы системаһының, мускулдарҙың һәйбәт, теүәл эшләүен тәьмин итә, ферменттар, витаминдар аш һеңдереүгә, матдәләр алмашыныуына, эске секреция биҙҙәре эшенә ярҙам итә.

Көн һайын һыуҙа шыйыҡлап дүрт ҡалаҡ бал ҡабыу ҡанда антиоксиданттарҙы арттыра, бал менән миндаль ашау холестерин кимәлен кәметә һәм шуның һөҙөмтәһендә йөрәк-тамыр ауырыуҙарына юл ҡуймай. Үҙәк нервы системаһы ҡаҡшағанда, тиҙ ярһығанда, арығанда бер-ике ай кис, иртән - утыҙ, төштән һуң ҡырҡ-алтмыш грамм бал тәҡдим ителә. Төнгөләккә бер стакан йылы һыуға бер ҡалаҡ бал бутап эсеү тынысландыра, йоҡоно яҡшырта.

Гипертония ауырыуына, юғары ҡан баҫымын төшөрөүгә халыҡ медицинаһында түбәндәге им сараһы ҡулланыла: берәр стакан бал, кишер, сөгөлдөр, керән һуты һәм бер лимон һуты бергә ҡушыла һәм ашарҙан бер сәғәт алда йәки ашағандан ике-өс сәғәттән һуң тәүлегенә өс мәртәбә бер-ике балғалаҡ ике айға хәтле ҡабул ителә. Бауыр ауыртҡанда иртән берәр ҡалаҡ бал, инә ҡорт һөтө, төштән һуң бал, һитә, йәиһә иртән-кис бал менән алма һуты ҡулланыу файҙалы. Йәнә, бер килограмм балға шул тиклем ҡарағат бутап, берәр ҡалаҡ бөткәнсе ашайҙар.

Ашҡаҙан-эсәк ауыртҡанда берәр ҡалаҡ балды, кипкәрҙе (сушеница) бер стакан ҡайнар һыуға һалып, утыҙ минут тотҡандан һуң, көнөнә өс мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәләр. Йыуан эсәк тиресәһе шешкәндә (колит) дүрт стакан һыуға йөҙ һикһән грамм бал, илле грамм һеркә болғайҙар, бер нисә көндән һуң ашарҙан алда яртышар стакан эсәләр. Һыуға йәки алма һутына ҡушып, тәүлегенә һикһән-йөҙ грамм бал, көнөнә өс мәртәбә берәр балғалаҡ саф һитә (манса) ҡабул итеү ҙә килешә.

Грипп тейгәндә балға шул хәтлем ҡырылған һарымһаҡ болғап, төнгөләккә бер ҡалаҡ ашайҙар. Йәиһә ярты стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡурай еләге, ҡарағат ҡушып, ашарҙан алда бөткәнсе эсәләр. Ангина, стоматит булғанда бер стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, ромашка болғап ауыҙҙы сайҡайҙар.

Склероз, мейе склерозы, атеросклероз кисергәндә бер стакан балға шул тиклем үк һуған һуты ҡушып, яҡшылап бутап, ашарҙан бер сәғәт алда көнөнә өс мәртәбә ҡабул итәләр. Радикулиттан, ревматизмдан интеккәндә торманы соҡоп, бал һалып, дүрт сәғәттән һуң уны ауыртҡан урынға һөртәләр.

Халыҡ медицинаһында туберкулездан, үпкә шешенән, бронхиттан дауаланыуҙың төрлө ысулдары билдәле. Эмалле кәстрүлгә йөҙәр грамм йүкә балы, аҡ май, эске сусҡа майы һалып, утҡа ҡуйып иретәләр, мәгәр ҡайнар хәлгә еткермәйҙәр. Шунан иретмәгә йөҙ илле грамм алоэ, илле грамм какао порошогы ҡушып яҡшылап болғайҙар. Бер ҡалаҡ ҡушымтаны бер стакан ҡайнар һөткә болғап, иртән һәм кис оҙаҡ ваҡыт эсәләр. Им сараһын түбәндәге ҡушылмалар менән дә әҙерләйҙәр: бер килограмдан ашыу йүкә балы, ике стакан һыу, йөҙ грамм зәйтүн майы, ваҡлап туралған алоэ, егерме биш грамм ҡайын бөрөһө, ун грамм йүкә сәскәһе төнәтмәһе. Ошо ҡушымтаны көнөнә өс мәртәбә берәр ҡалаҡ ашайҙар.

Әүәл, тәьҫирле дарыуҙар юҡ саҡта, туберкулез дауалауға бирешмәгән сир ине. Шул ваҡытта беҙҙең күрше ауылдан үпкә ауырыуына дусар бер апай бик оҙаҡ район дауаханаһында ятты. Дауалаусы табип, ниһайәт, иренә әйтә: "Ҡатынығыҙҙы алып ҡайтығыҙ, ике-өс ай ғына йәшәре ҡалған". Был ауыр хәбәрҙе апай ишетеп ҡала. Ҡайтҡас, ҡайғыһынан кәрәҙле балдан әсе бал ҡоя ла эсә, ҡоя ла эсә. Байтаҡ умарта тотҡан булалар. Шулай өс-дүрт ай, ярты йыл үтеп китә, апай һаман иҫән, яҡты донъя менән хушлашмай, ә теремекләнгәндән-теремекләнә. Бер мәл ауылға табиптар килеп төшә, ни күрһендәр - апай йүгереп йөрөп ята. Район дауаханаһына алып барып, рентгендан ҡараһалар - туберкулездың эҙе лә ҡалмаған. Мансалы, прополислы, инә һөтлө кәрәҙле балдың әсе балы бына шулай үпкә сиренә шифа була.

Бал менән бергә юл япрағының антисептик тәьҫире, шешеүгә ҡаршы, йәрәхәттәрҙе уңалтыуға, ауыртыуҙы баҫыуға, ҡаҡырыҡ сығарыуға йоғонтоһо арта. Эвкалипт ҡушылған бал да көслө антисептик тәьҫир яһай, ауыртыуҙы, микробтарҙы бөтөрә. Шулай уҡ календулалы бал йәрәхәттәрҙе уңалтыу, шешеүҙе, бактерияларҙы, спазманы юҡ итеү, йәнә үт ҡыуыу үҙенсәлектәренә эйә. С витамины һәм күҙле бәшмәк (чага) ҡушыулы бал да шештәргә ҡаршы торосанлыҡты көсәйтә.

Йөрәгүлән ҡушылған балды даими ҡабул иткәндә ҡан тамырҙары баҫымы кәмей, йөрәк ауырыуына бәйле шешенеү бөтә, йоҡо һәйбәтләнә, физик әүҙемлек арта, аң-зиһен асыла. Дунала өҫтәлгән бал йөрәк-тамыр системаһы, йөрәк мускулдары эшмәкәрлеген яҡшырта, йөрәк тибеүе йышлығын, холестерин кимәлен кәметә. Бесәй үләне ҡушылған бал иһә нервы, йөрәк-тамыр системаһын тынысландыра, бәүел бүленеүҙе һәм йоҡоно һәйбәтләндерә.

Алтын тамыр ҡушылған бал организмды ҡанға ифрат та кәрәк микроэлементтар, витаминдар менән байыта, тәнгә ҡеүәт өҫтәй, дәртте күтәреүгә, һаулыҡты нығытыуға, оҙон ғүмерлелеккә булышлыҡ итә. Бал мумие менән бергә бөтә тән ағзаларына, айырыуса ҡан барлыҡҡа килтереүгә, һөйәктәргә, нервы системаһына, иммунитетҡа тергеҙгес, сәләмәтләндергес йоғонто яһай. Йәнә спирулиндар һәм С витамины менән бергә бал ҡушымтаһы сихәтле, биологик йәһәттән тәьҫирле. Уны көн һайын ҡулланғанда, интеллектуаль һәм физик әүҙемлек күтәрелә, шулай уҡ йөрәк-тамыр системаһының һәм ашҡаҙан-эсәк юлының эше яҡшыра.

Имселәр, табиптар бик тапҡыр билдәләгәнсә, бал - йәшәреү эликсиры, тән шифаһы, оҙон ғүмерлелек тәғәме. Халыҡ медицинаһында шешектәргә ҡаршы - әрекмән һуты ҡушылған, йүткереүҙән - тормаға һалынған, экземаны, һөйәлде, һытҡыны, бешкән урынды имләүҙә - ҡырылған картуфҡа өҫтәлгән, сәс үҫтереүгә һәм нығытыуға һуғанлы бал ҡулланалар. "Табиплыҡ фәне ҡануны"нда балды таҙа көйө һәм дарыу үләндәре, еләк-емеш, йәшелсә, аш-һыу менән ҡулланыу буйынса бихисап кәңәш, тәҡдим бирелә.

Бал косметикала ла киң ҡулланыла, дауалау битлектәре яһағанда файҙаланыла. Уның нигеҙендә бит, тән, ҡулдар, аяҡтар өсөн туҡландырыусы кремдар, желелар эшләп сығарыла. Сәләмәтлек һәм матурлыҡ тәбиғәттең үҙенән тип белдереп, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге косметик сараларҙың "Тылсымлы бал ҡорто" тигән яңы серияһын тәҡдим итә: төрлө-төрлө махсус кремдар, душ өсөн гель, шыйыҡ һабын, ванна өсөн күбек...

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

## Конкурс: "Башҡортостандың ете мөғжизәһе"

**"Киске Өфө" гәзите "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" тигән конкурс иғлан итте. Ул конкурс "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Сәләм" ижад берекмәһе менән берлектә алып барыла.**

Конкурс өс этапта үткәреләсәк. Иң тәүҙә (июнь аҙағына тиклем) Башҡортостаныбыҙҙағы мөғжизә булырҙай бар нәмәне - тәбиғәт объекттарын, тарихи, мәҙәни, сәнғәт әйберҙәрен барлап сығайыҡ. Һәр кем үҙе тәҡдим иткән объект тураһында һүҙ әйтә, уны үҙенең дәлилдәре менән яҡлай, тауыш бирә.

Икенсе этап июлдән башлана һәм беренсе этапта тәҡдим ителгән объекттар араһынан 14-е һайлап алынып, артабан уларға тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны -252-39-99, 246-03-24, "Киске Өфө" гәзите сайты - www.kiskeufa.ru, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны -251-73-91, 251-90-44, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты - www.Saljam.ru аша ла атҡарыласаҡ.

Өсөнсө этапта жюри "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында еңеүселәрҙе билдәләйәсәк. Еңеүселәр махсус ойошторолған кисәлә хәбәр ителәсәк.

**Шулай итеп, "Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсында Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттар ҡатнашырға тейеш. Һеҙҙән хаттар, мәҡәләләр көтәбеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

**✓Егетем оҙатырға сыҡҡайны, уға ҡарайым да, сусҡа башы күҙ алдыма килә. Унһыҙ бер минут та йәшәй алмаясаҡмын, тип уйлай торғайным. Ҡыҫҡаһы, сусҡа башы мине яңылыш аҙымдан алып ҡалды...**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# УРЫҪТАН... СУСҠА БАШЫ ҠОТҠАРҘЫ,

## йәки Ҡатнаш никахтар кем өсөн отошло?

**Людвиг Шабановтың "Киске Өфө" гәзитенең 15-се һанында баҫылған "Хоҙай биргән хоҡуғыбыҙ" тигән мәҡәләһе күптәрҙе уйға һалғандыр. Тәрән аҡыл, йөрәккә үтеп инерлек һүҙҙәр.**

Эйе, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһында башҡорттарҙың һаны кәмемәҫме икән, тигән уй борсой беҙҙе. Бының сәбәбе - ҡатнаш никахтар. Саф башҡорт төбәге булып һаналған Урал арьяғы райондарында ла ошондай ғаиләләр арта бара.

Кемдер: "Мөхәббәт өсөн кәртә булмаған кеүек, һөйгәндәргә тел дә, дин дә ҡаршылыҡ түгел", - тиергә ашығыр. Уларға яуап итеп, бер ханымдың яҙмышын миҫалға килтерәм.

Ул апай хәҙер алтмышты уҙҙы инде. Заманында "Яраттым мин рус егетен" тип шаяра-көлөп йырлап, урыҫҡа кейәүгә сыға. Светлана һәм Артур тигән балалар үҫтерәләр, икеһе лә тырышып эшләйҙәр. Йорттары һоҡланғыс матур, донъялары етеш, бөтөн. Ошо ханымдың илай-илай һамаҡлауын ишетеп, тетрәнергә тура килде: "Ни бысағыма миңә баҡсаһы, донъяһы?! Ҡартайған көнөмдә ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшеп, ҡунаҡтарҙа үҙ телемдә йырлап ултырмағас. Йәш саҡта һиҙелмәй ине, ә өлкәнәйә килә күңелемдә ауыр һағыш баҫа. Хатта баш һуҡҡан яҡҡа сығып китке килә..."

Элек-электән икенсе дин кешеһенә кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙарыбыҙ бәҙҙоға алған, ә бына ир-егеттәр иһә урыҫ, украин һ.б. милләт ҡыҙҙарына өйләнеп, мосолман арттырыусы булып һаналған. Хәҙерге ваҡытта нисек һуң? Юғары белемле, тормошта күп нәмәгә өлгәшкән һәм өлгәшәсәк башҡорт егеттәре мәрйәләргә өйләнеп, милләтен юҡҡа сығара.

Миңә таныш ғаиләлә өс бала тәрбиәләнә. Аталары - башҡорт, әсәләре - мәрйә. Саф башҡорт фамилияһына Ольга, Владимир, Ирина тигән исемдәрҙең эйәреп килеүе сәйер яңғырай. Ул ғына түгел, был өс бала ла, паспорт алырға ваҡыты еткәс, милләтен урыҫ тип күрһәткән, өсөһө лә сиркәүҙә суҡындырылған. Өлкән ҡыҙҙары кейәүгә башҡорт егетенә сығып, уның фамилияһына күсте. Атаһы башҡорт булыуына ҡарамаҫтан, ҡыҙып-ҡыҙып үҙенең мәрйә булыуын иҫбатлай. Бер саҡ хатта: "Я башкирят терпеть не могу", - тип ыҫкындырҙы. Быны ишетеп телһеҙ ҡалған кешеләрҙең: "Һуң, ирең башҡорт бит!" тиеүенә, йәш кәләш иҫе лә китмәй: "Это вопрос времени", - тип кенә ебәрҙе.

Ысынлап та, ғәрлеге ни тора! Һинең илеңә баҫып инеп, ереңә хужа булыуҙарынан тыш, милләтеңде мыҫҡыл итәләр, һай аҡыллы ир-егеттәребеҙҙе маңҡортҡа әүерелдерәләр.

Әйткәндәй, был ғаиләләге икенсе ҡыҙ бала татар егетенә кейәүгә йыйынғас, әсәһе лә, апаһы ла ҡаршы сыға. "Из них (йәғни татар егеттәренән - авт.) нормального мужа не вылепишь", - ти улар.

Ысынлап та, урыҫ ҡыҙына өйләнеп, уның көйөнә бейегән, бар туғандарының ҡолона әүерелгән татар егеттәрен күргәнем юҡ....

Сая рухлы батыр башҡорттарҙың тамыры ҡороном икән әллә, тип уйлап ҡуяһың. Сөнки егеттәребеҙ ҙә, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ниндәй милләтте иш итә, шул халыҡтың телен, йолаларын, хатта динен үҙ итеп, юҡҡа сыға. Ҡатнаш никахта донъяға килгән сабыйҙар бик һирәк осраҡта ғына башҡорт булып тәрбиәләнә.

Тағы бер ғаиләне миҫалға килтерәм. Ғаилә башлығы - башҡорт, әсә - татар. Ике бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Әсә кеше әйтеүенсә, балаларҙың теле асыла башлағанда ғаиләлә тәүге низағ сыға. Ғаилә башлығы ҡатынының улдарына татарса өйрәтеүен теләмәй, ә уныһы башҡорт телен өнәп еткермәй. Һөҙөмтәлә, малайҙарҙың теле "мама, папа" тип асыла, атаәсәһенең "тырышлығы" менән башҡортса ла, татарса ла аңламайҙар.

Үкенескә ҡаршы, ҡатнаш никахтар ауылдарға ла үтеп инеп, тамырыбыҙҙы ҡорота, телебеҙҙе юҡҡа сығара. Ә бит әсә телендә тәрбиәләнгән балалар сит телдәрҙе тиҙерәк үҙләштерә. Хәҙерге заман беҙҙән бер нисә сит телде белеүҙе талап итә бит. Шуға күрә башҡорттарға Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһына ныҡлап әҙерләнергә, ныҡлап уйланырға кәрәк. Милләтебеҙҙең ер йөҙөнән юҡҡа сығыуына юл ҡуймайыҡ, туғандар. Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың: "Аҡтамырҙың бер генә киҫәге ерҙә ҡалһа, ваҡыты, уңайлы мәле етеү менән ул бар баҡсаны баҫыр. Беҙҙең халҡыбыҙ ҙа шулай: уңайлы мәле еткәс, тағы ҡалҡыныр, күтәрелер, өҫтөндәге иҙеүселәрҙе алып ташлар", - тигән һүҙҙәрен иҫтән сығармайыҡ, йәшәйешебеҙҙең девизы итеп алайыҡ.

**Шулай итеп...**

**Әхирәттәрем араһында: "Кейәүгә сығыуҙан сусҡа башы ҡотҡарҙы", - тигән лаҡап йөрөй. Ә эш былай була. Бер башҡорт һылыуҡайы рус егетенә ғашиҡ булып, ата-әсәһенең, туғандарының ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, уға кейәүгә сығырға ҡарар итә. Егет булаҫаҡ кәләшен таныштырыу өсөн тыуған йортона алып ҡайта. Ҡыҙ өй соланындағы өҫтәлдә сусҡа башы күреп, шаҡ ҡата. "Ҡалғанын томандағы кеүек хәтерләйем. Ата-әсәһе нимә һөйләгәндер, иҫләмәйем. Егетем оҙатырға сыҡҡайны, уға ҡарайым да, сусҡа башы күҙ алдыма килә. Унһыҙ бер минут та йәшәй алмаясаҡмын, тип уйлай торғайным. Ҡайҙа ул! Ҡыҫҡаһы, сусҡа башы мине яңылыш аҙымдан алып ҡалды..." Эйе, ҡатнаш никахтарҙың халҡыбыҙ өсөн түгел, ә маңҡорттар арттырыу, беҙгә ҡанын ҡушып, үҙ тамырҙарын нығытҡан сит милләттәр өсөн отошло икәнлеген аңларға ваҡыт.**

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Матурлыҡ тышҡы йөҙ генә түгел

Беҙ көн һайын тигәндәй берәй журнал йәки телевизор рекламаһында сибәр ир-егет менән матур ҡатын-ҡыҙ йөҙҙәрен күрәбеҙ. Әгәр был тауарҙы һатып алһағыҙ, һеҙ ҙә беҙҙең кеүек була алаҫаҡһығыҙ, тип сығыш яһай улар. Әммә ысынбарлыҡта улай түгел, һин кәрәкле тауар ҡулланып йәки рекламалағы теге йәки был автомобиль руле артына ултырып ҡына матур, бәхетле, һөйөклө һәм популяр булып китә алмайһың.

Тормошта барыһын да ошо рекламалағы кешеләр әйткәнсә эшләп тә, был сифаттарға өлгәшмәгәндәр ҙә бар бит. Һинең иң гүзәл, бәхетле, һөйкөмлө өләшең эске донъяңда урынлашҡан, уны кейем ярҙамы менән дә, автомобиль ярҙамы менән дә тыуҙырып булмай. Матурлыҡ - ул тышҡы йөҙ генә түгел. Ул һинең күңел түренән башланып, йөҙөңдә, һын-килбәтеңдә, үҙ-үҙеңде тотоуҙа, телмәреңдә һәм тауышыңда сағылыш ала. Был барлыҡ сифаттар һинең ҡиәфәтеңдә кәүҙәләндерә лә инде.

Матурлыҡ бүтән кешеләргә, бигерәк тә танылыу яуламаған, затлы кейенмәгән, ҡиммәтле автомобиле йә иһә башҡа төр милке булмаған ябай кешеләргә ҡарата мөнәсәбәтеңдә сағыла. Һин кешегә уның кейеме йәки автомобиленә иғтибар итмәйенсә үтә ҡарай алаһыңмы? Ҡасан да булһа кешенең эске донъяһын күрергә тырышып ҡарағаның булдымы?

Бик күп билдәле тарихи шәхестәр ябай сығышлы булған - уларҙың матди байлығы ла, ниндәй ҙә булһа социаль өҫтөнлөгө лә булмаған. Уларҙың аны, ижади башланғысы, кешеләргә ҡарата ихтирамы, уларҙы баһалай белеүе һәм башҡаларҙан айырылып тороу телəге булған. Изге Франциск Ассизский, Махатма Ганди һәм үҙенең эске булмышы менән ысынлап та матур һәм рухи яҡтан бай булған башҡа бик күп шәхестәр фәҡирлектә йәшәгән. Был шәхестәрҙең беҙҙең тормошҡа йоғонтоһо уларҙың рухи сифаттарының тәрәнлеге менән үлсәнә. Йәмғиәт фекере тауышын йыйыу йәки "Forbes" журналы исемлегенә инеү буйынса ҡарағанда улар лидерҙарҙан һаналмаған, әммә улар хеҙмәте кешеләр тормошон үҙгәрткән һәм хәҡиҡәт баһаланған ваҡытта ул шулай дауам итәсәк.

Иң мөһиме - һинең тормошоңдо нисек итеп йәшәргә теләүең. Бының өсөн түбәндәге һорауҙарға яуап биреүҙән башлай алаһың: бөгөн эшләгән эшең егерме-кырҡ йылдан ярағлы һәм файҙалы булырмы? Бөгөнгө тормошоң менән ҡәнәғәтлек кисереп, киләсәктә бығаөәҙерләнер өсөн нимә эшләйһең?

"Мин"еңдең иң яҡшы өлөшө булырға тырышып, үҙеңде ярат. Үҙеңә яҡын дуҫ кеүек мөнәсәбәттә бул һәм ихтирам, маҡтау, ныҡлы шәхси мөнәсәбәттәр һәм яҡшы итеп үткәрелгән тормоштан ҡәнәғәтлек алыуҙы телә. Әгәр ҙә һин һәләтеңдән килгән юғары кимәлгә күтәрелә алып, лайыҡлы тормош кисереп йәшәйһең икән, былар барыһы ла һинеке буласаҡ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*



# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Балаңа мираҫ итеп үлемһеҙлек бүләк ит

Осеола Маккарти тормошо ысынлап та ғәжәпләнерлек ине. Фәҡирлектә тыуып үҫеп, ул бәләкәй генә өйҙә көн күрә. Өйөнән ул аҙыҡ-түлек алыу һәм сиркәүгә барыр өсөн генә сығыр була. Ул нисек тә булһа йәшәр өсөн кешеләрҙең бысраҡ керҙәрен йыуып, аҡса эшләй, шул ҙур булмаған килемдең бер ни тиклем өлөшөн йыйып бара. Ул машина ла йөрөтә белмәй һәм бер ваҡытта ла кейәүгә сыҡмаған була. Әммә бик күп йылдар үткәс, инде һикһән йәшен уҙғанда, журналистарға "әле булһа ла яҡшы кеше менән танышыуҙан баш тартмауын" әйтеп ыҫкындыра. Осеола шулай эшләп тапҡан аҙ ғына аҡсаһынан да өлөш арттырып, ябай, тәртипле һәм тыйнаҡ ҡына тормошон алып бара.

Һәм бер ваҡыт үҙенең һикһән ете йәше тулыр алдынан ул урындағы банкыға килә. Банк кассиры Осеоланан иҫәбендә күпме аҡса йыйылыуын белмә икәнлеген һорай. Ҡарсыҡтың был турала бөтөнләй хәбәрҙар булмауын аңлап, кассир йылмая һәм хәҙерге ваҡытта уның иҫәбендә егерме биш миллиондан артыҡ доллар ятыуын әйтә. Ошо ваҡыт Осеоланың был аҡсаның ни тиклем күп булыуын күҙ алдына килтермәүе асыҡлана. Кассир шунан прилавкаға унар тинлек аҡса теҙеп ҡуя ла, былай тип әйтә: "Осеола, ошо ун тимер аҡсалар һеҙҙең һаҡлыҡ аҡсағыҙ икән, ти. Улар менән нимә эшләйәсәкһегеҙ?" Ҡарсыҡ тәүге тимер аҡсаға төртөп күрһәтеп, уны сиркәүгә тапшырасағын белдерә. Киләһе өс тимер аҡсаны үҙенең һөйөклө ул һәм ҡыҙҙары иҫәбенә күсерергә ҡарар итә. Ҡалған тимер аҡсаларға ҡарап йылмая ла, ҡарсыҡ уларҙы бер мөһим әйбергә тотонасағын әйтә.

Бер ай үткәс, Осеола йәшәгән ҡала университетына 150 мең долларлыҡ чек килә. Осеола университет етәкселегенә килеп, был аҡсаларҙы аҙ тәьмин ителгән ғаиләнән сыҡҡан студенттарға, үҙҙәренең белем өлкәһендәге хыялдарын тормошҡа ашыра алһын өсөн, стипендия итеп тәғәйенләүҙәрен һорай. Фильм ҡарағандан һуң мин был гуманлы аҙым донъя йөҙөндәге бөтә кешеләргә тәрән тәьҫир итеүен белдем. Күп илдәрҙең президенттары һәм премьер-министрҙары Осеолаға ихтирам йөрөткән. Уны хатта Гарвард университетының профессорҙар делегацияһы килеп күргән. Үҙенә көтөлмәгәндә дан яуыуына ҡарамаҫтан, Осеола артабан да үҙенең ябай һәм инсафлы тормошо менән йәшәргә ныҡлы ҡарар иткән. Уның бер генә хыялы - университетты тамамлаған үҙенең тәүге стипендиатын күреү теләге булған. Әммә үҙенең оло йәштә булыуына ҡарап, Осеола был хыялының үҙе тере саҡта тормошҡа ашмаясағын аңлаған. Шулай ҙа уның был донъянан китеүенә бер ай ҡалғанда тәүге стипендиаты бүләк алыу өсөн сәхнәгә күтәрелгән.

Осеоланың үлеменән һуң журналистар стипендиат ҡыҙ менән осрашып, был ҡатындың иҫкә алып, ниндәй һүҙҙәр әйтә алыуын һорай. Студент ҡыҙ былай тип яуап бирә: "Аллаһы Тәғәлә үҙенең иң яҡшы фәрештәләренең берениә йәннәттән урын бирһен. Ул бөтә донъя өсөн илһам сығанағы, фатиха һәм хазина булды".

**Робин ШАРМА.**
**(Дауамы бар).**

**✔Республика башҡорт лицей-интернатының төп үҙенсәлеге - математика, физика, информатиканы тәрәнәйтеп өйрәнеү. Уҡыусылар 7-се синыфта теүәл фәндәрҙе инглиз телендә өйрәнә башлай.**



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ҺЫНАУ ТОТ ҺӘМ...

## лайыҡлы мәктәптә уҡы

**Тормошҡа етди ҡараған, киләсәгенә битараф булмаған, төплө белемгә эйә булырға ынтылған малайҙарҙы Республика башҡорт лицей-интернаты һынауҙар тоторға саҡыра.**

Республика башҡорт лицей-интернатының төп үҙенсәлеге - математика, физика, информатиканы тәрәнәйтеп өйрәнеү. Уҡыусылар 7-се синыфта инглиз теле буйынса ныҡлы әҙерлек үткәндән һуң, теүәл фәндәрҙе ошо телдә өйрәнә башлай. Лицейҙа башҡорт һәм рус телдәрен юғары кимәлдә үҙләштереүгә лә етди иғтибар бүленә.

Күп илдәр һәләтле йәштәрен алға киткән башҡа илдәргә ебәреп уҡыта. Был дөйөм глобалләшеү шарттарында заман арбаһынан төшөп ҡалмау өсөн бик мөһим. Шуға ла лицей-интернаттың төп маҡсаттарының береһе - сит илгә сығып белем алырҙай уҡыусылар әҙерләү. Быны өсөн информацион технологияларға ҙур иғтибар бүленә, заман талаптарына ярашлы, уҡыу йортоноң матди базаһы ла йылдан-йыл нығына бара.

Тик ниндәй генә кәрәкле технологиялар булмаһын, улар уҡытыусыларҙы алыштыра алмай. Лицей-интернаттың коллективы сағыштырмаса йәш булыуға ҡарамаҫтан, улар араһында бай тәжрибә туплаған, үҙ эшенең оҫтаһына әүерелгән уҡытыусылар бихисап. Быны уҡыусыларҙың район, ҡала, республика кимәлендәге олимпиадаларҙа дауими призлы урындар яулауы, Рәсәй күләмендәге олимпиадаларҙа дипломдарға лайыҡ булыуҙары ла дәлилләй.

Лицей-интернатта уҡыусылар көнөнә бушлай 5 тапҡыр туҡлана. Йәшәү өсөн айына 600 һум түләргә кәрәк, әммә кәрәкле документтар йыйып, был түләүҙәрҙән дә азат була алаһығыҙ. Уҡыусылар 2-3 урынлыҡ бүлмәләрҙә йәшәй. Һәр ҡатта ял итеү бүлмәһе, теннис өҫтәле лә бар, шулай уҡ медицина пункты һәм стоматология кабинеты эшләй. Мәктәп формаһы булып ҡара төҫтәрҙәге классик костюм, аҡ күлдәк, ҡыҙыл галстук һанала.

**Шулай итеп...**

**Республика башҡорт лицей-интернатының 7-се синыфына уҡырға инергә теләүселәр өсөн 2009 йылдың 17 майында 11 сәғәттә республика буйынса түбәндәге ҡала һәм ауылдарҙа ҡабул итеү имтихандары үткәрелә: Өфө ҡалаһы, Ҡулса урамы, 74; Баймаҡ ҡалаһы, мәктәп-интернат; Белорет ҡалаһы, 22-се Башҡорт гимназияһы; Дәүләкән ҡалаһы, мәктәп-интернат; Учалы ҡалаһы, 12-се мәктәп; Аҡъяр ауылы, 2-се урта мәктәп; Асҡар ауылы, 2-се мәктәп; Оло Ыҡтамаҡ ауылы, 1-се лицей; Исәнғол ауылы, 1-се мәктәп; Малаяҙ ауылы, башҡорт гимназияһы; Мәсәғүт ауылы, Республика лицей-интернаты; Мораҡ ауылы, Башҡорт гимназияһы; Иҫке Собханғол ауылы, урта мәктәп; Юлдыбай ауылы, урта мәктәп.**

**Һынауға үҙегеҙ менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ алып килеү мотлаҡ. Ҡабул итеү имтихандары математика һәм логика, рус теле, башҡорт теленән тест формаһында үтә. Балдарҙы иҫәпләгәндә математика һәм логика буйынса сиселгән мәсьәләләр һанына өҫтөнлөк биреләсәк.**



ХОККЕЙ

# РӘСӘЙ - ЧЕМПИОН!

**Рәсәйҙә ябай тел менән аңлата алмаҫлыҡ шатлыҡ-ҡыуаныс, ә хоккей уйынының тыуған ерендә, тыуған илендә - икенсе йыл рәттән траур-хәсрәт! Саған япраҡтары (Канаданың дәүләт символы) һарғайып ҡойолдо.**

Шулай булмай һуң! Рәсәй егеттәре былтыр ҙа, быны быйыл да Канада хоккейсыларын үтә көсөргәнешле уйындарҙа ҙур оҫталыҡ менән еңеүгә өлгәште. Былтыр еңеүле шайбаны - Илья Ковальчук, быйыл иһә "алтын шайбаны" юлаевсы Александр Радулов индерҙе.

Команданың баш тренеры Вячеслав Быковты иң беренсе булып ил президенты Дмитрий Медведев, унан инде премьер-министр Владимир Путин көтөп алынған еңеү менән ҡотланы. Ә бындай еңеүҙе Рәсәйҙең хоккей уйынын яратыусылар, көйәрмәндәр 1988 йылғы еңеүгә хәтлем 15 йыл көткәйне.

Донъя чемпионаты старт алғанда Рәсәй йыйылма командаһының еңеп сығасағына икеләнеп ҡараусылар байтаҡ булды, йәнәһе, быйыл команда составы былтырғыға ҡарағанда бик уҡ шәптән түгел (Быныһы инде, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә. "Салауат Юлаев" командаһы уйынсыларын тейешенсә баһалап етмәү ине). Рәсәй йыйылма командаһына бер юлы 6 юлаевсыны саҡырыуҙы күптәр өнәп еткермәне, ә бүтән көслө командаларҙан берәр-икешәр генә хоккейсы, хатта быйылғы чемпион "Аҡ Барс"тан да унда ни бары 3 уйынсы индерелгәйне.

Өҫтәүенә, чемпионат барышында Рәсәй командаһы тос ҡына юғалтыуҙарға дусар булды. Иң көслө һаҡсыларҙың береһе Антон Волченков, иң тырыш, арыу-талыуҙы белмәҫ һөжүмсе Данис Зарипов яраҡһыҙ уҡ ныҡ имгәнеп, сафтан сыҡты. Уларҙы тиҙ генә алыштыра алырлыҡ уйынсылар табыуы үтә ҡыйын ине.

Канада хоккейсылары менән финал ярыштары Рәсәй уйынсылары өсөн көтөлмәгәнсә уңышһыҙ башланды. Канадалар алтынсы минутта уҡ иҫәпте асты. Бындай хәлдә бөгөнгө уйынсыларҙың төшөнкөлөккә бирелеүе ихтимал ине. Бигерәк тә ҡапҡасы Илья Брезгановтың уйын дилбегәһен ҡулдан ысҡындырып ҡуйыуы мөмкин ине. Әммә ул тиҙ бирешә торғандарҙан түгел икән. Артабан ул ҡапҡаны шул тиклем ныҡ итеп бикләне, канадалар күпме генә тырышһа ла, ысын-ысыны менән штурм ойоштороһалар ҙа ҡапҡанан бер гол да индерә алманылар.

Тик ун өсөнсө минутта ғына беҙҙең егеттәр яуап шайбаны индерә алды. Виталий Атюшов менән Дмитрий Калинин ярҙамында Олег Сапрыкин канадалар ҡапҡаһына яуап шайбаһын сәпәне. Иҫәп тигеҙләнде: 1:1.

Икенсе осорҙа Олег Сапрыкин һәм Константин Горовилов ярҙамында юлаевсы Александр Радулов ҡаршы яҡ ҡапҡаға "алтын" шайбаны сәпәне. Иҫәп 2:1 булды һәм ул уйын бөткәнсе үҙгәрмәне. Александр Радулов индергән гол хоккей уйыны тарихына алтын хәрефтәр менән яҙыласаҡ. Канада ҡапҡасыһының ҡапҡа алдында һуҙылып ятыуы ла беҙҙең хоккейсы бәргән шайбаны туҡтата алманы.

"Салауат Юлаев" командаһы уйынсылары: ҡапҡасы Александр Еременко, һаҡсылар Олег Твердовский, Виталий Прошкин, һөжүмселәр Александр Радулов, Алексей Терещенко, Александр Пережогин Рәсәй йыйылма командаһына чемпион исемен яулауға тос өлөш индерҙеләр.

Уйын бөткәс, Рәсәй командаһы ҡиммәтле күсмә Кубок менән, ә һәр уйынсы алтын миҙал менән бүләкләнде. Канада хоккейсылары клубына көмөш миҙал тағылды.



Йыйылма командалағы “юлаевсылар”

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## МИЛЛИ МӘҘӘНИӘТ БАЙРАМЫ БУЛАСАҠ

**2009 йылдың 9-12 июнь көндәре Халыҡ-ара "Берҙәмлек" милли мәҙәниәт фестивале уҙасаҡ. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында тамыр йәйгән был өлкәвлдең төп маҡсаты - Башҡортостан, Рәсәй һәм сит ил халыҡтары менән ижади бәйләнеш булдырыу, республика халҡын донъя халыҡтары мәҙәниәте һәм ижады менән таныштырыу.**

Фестиваль Яңауыл ҡалаһында Фәтих Иҫхәнов исемендәге призға "Моңға бай гармун байрамы" республика байрамы менән асыласаҡ. Артабан Борай районында һабантуй үтәсәк, Ағиҙел, Нефтекама ҡалалары, Борай, Яңауыл райондары буйлап фестиваль туры уҙасаҡ. Фестиваль 12 июндә Нефтекама ҡалаһында Гала-концерт менән тамамланасаҡ. Мәҙәни сараға Төркиә, Әзербайжан, Финляндия, Югославия, Белоруссия, Корея, Украина, Ҡаҙағстандан ижади коллективтар килеүе көтөлә.

## ПРЕМИЯҒА КАНДИДАТТАР БИЛДӘЛӘНДЕ

**2008 йылда әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһына кандидаттар билдәләнде.**

Опера йырсыһы Илһам Вәлиев, актриса Светлана Ғиниәтуллина, һынлы сәнғәт өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн Руслан Ниғмәтуллин, "Еңеү һалдаттары" очерктар йыйынтығы өсөн радиожурналист Зөлфиә Рәхмәтуллина, заманса башҡорт әҙәбиәтендә художествоны тәржемәне үҫтереүгә тос өлөш индергәне өсөн Зәһрә Бураҡаева, милли һәм классик музыканы үҫтергәне һәм пропагандалағаны өсөн музыкант Сыңғыҙ Ханнанов, Н. Асанбаевтың "Ете ҡыҙ" пьесаһы буйынса ҡуйылған спектакль өсөн Айрат Абушахманов һәм Альберт Нестеров, Ф.Гәскәров исемендәге Башҡортостан Республикаһы Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле репертуарында яңғыҙ партияларҙы башҡарғаны һәм сағыу сәхнә образдары тыуҙырғаны өсөн Алһыу Вәлиуллина, Айһылыу Ғәйнетдинова, Иршат Ғайсин, Роберт Хәмиҙуллин, Марат Яҡуповтан торған ижади коллектив конкурсҡа ҡатнашыу өсөн тәҡдим ителде. Тикшереү материалдарын, рецензияларҙы һәм иҫкәрмәләрҙе 8 июнгә тиклем БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығына ебәрергә. Адресы: 450000, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10. Белешмәләр өсөн телефондар: (3472) 251-14-75, факс 276-45-87.

## ФОРТЕПИАНО МУЗЫКАҺЫ БӘЙГЕҺЕ УҘАСАҠ

**2009 йылдың 15-16 майында 18.00 сәғәттә З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының Шаляпин залында Башҡорт фортепиано музыкаһын башҡарыусыларҙың беренсе асыҡ конкурсы үтә.**

Унда Башҡортостан ҡала һәм районДарынан 130 пианист ҡатнашасаҡ. Башҡорт композиторҙарының фортепиано өсөн яҙылған әҫәрҙәрен башҡарыусылар араһындағы ижади бәйге Башҡортостан Республикаһы Президенты Грантына уҙғарыласаҡ. Конкурстың маҡсаты һәм бурыстары - башҡорт халҡының рухи мираҫын пропагандалау, милли музыканы сағыу башҡарыусыларҙы асыҡлау һәм үҫтереү, башҡорт фортепиано әҫәрҙәре фондын һаҡлау һәм фортепиано өсөн әҫәр яҙыуға башҡорт композиторҙарын дәртләндереү булып тора.

Конкурста дүрт йәш төркөмө буйынса 7 йәштән алып 25 йәшкә тиклем башҡарыусылар ҡатнаша. Беренсе асыҡ конкурс-фестиваль 16 майҙа 19.00 сәғәттә Шаляпин залында еңеүселәр һәм лауреаттар сығышынан торған Гала-концерт менән тамамланасаҡ.

✔*Аҡсаның ылыҡтырғыс тәьҫиренә ҡаршы тора алмағандар бер ваҡытта ла бәхетле була алмай.*

*(Демокрит).*



*АФАРИН!*

# ТУЙМАЗЫЛА ТЫУҘЫ "ҠАРАНАЙ"

**Туймазы ҡалаһында "Ҡаранай" тигән башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарған рухлы эстрада төркөмө барлыҡҡа килеүе был төбәктә үҙенсә бер оло ваҡиға һымаҡ ҡабул ителде. Төркөм егеттәре Туймазы районы ауылдарында үҙҙәрен танытып, башҡорттар араһында ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәре араһында ла һөйөү яулап өлгөрҙө. Тәүге концерттарын Туҡтағол ауылында ҡуйғайнылар. Урындағы халыҡ дәртле егеттәрҙе сәхнәнән тиҙ генә ебәрергә теләмәй, аяғүрә баҫып алҡышланы. "Ҡаранай"ҙарҙың уңыш сере улар башҡарған "Ҡаранай", "Шакирйән", "Абдрахман", "Буранбай" кеүек моңло йырҙарҙа һәм... уларҙың фонограмма-маҙар менән файҙаланмай, музыкаль инструменттарҙа (гитара, ҡурай, синтезатор) үҙҙәре уйнап, уларға ҡушылып тере тауыш менән йырлауында. Хәҙер концерттарҙа бындай "тере" тауыш менән сығыш яһағандарҙы һирәк күрергә тура килә бит. Төркөм тураһында һөйләүен һорап, уның етәксеһе, яҡынтирәлә оҫта ҡурайсы тигән дан алған Баймаҡ егете Рәмзин ӘБСӘЛӘМОВҡа мөрәжәғәт иттек:**



- Тәрән рухлы башҡорт эстрада төркөмө ойоштороп, телен онота башлаған йә үҙҙәрен татар милләтенән тип һанап йөрөгән башҡорттарҙың рухтарын уятыу минең күптәнге хыялым ине. Татарстан яҡын булғанғамылыр, был яҡтағы күп кенә боронғо башҡорт ауылы кешеләре лә үҙҙәрен татар милләтенән тип һанай. Үҙ нәҫеленең, ауылдарының тарихын белмәй. Ошо хәлде күреп, йөрәктәр нисек үртәлмәһен! Күптән түгел генә Учалы ҡалаһынан Ҡадир Ишбулдин тигән йырсы егет Туймазыға күсеп килде. Уның менән тиҙ уртаҡ тел таптыҡ. Хыялдарыбыҙ берлеге беҙҙе ныҡлы дуҫлаштырҙы. Беҙҙе тағы ла бер ҡыуаныслы ваҡиға көткән икән: Өфөнән Октябрьский ҡалаһына клавишала уйнаусы һәм аранжировкалар яһаусы Азамат Ишемғужин атлы Баймаҡ районы егете күсеп килде. Азамат та йыр-моңға, халҡыбыҙ яҙмышына битараф булмай сыҡты. Күмәкләп йыйылып һөйләштек тә, башҡорт эстрада төркөмө булдырырға ҡарар иттек. Төркөмөбөҙгә Салауат Юлаев осоронда крәҫтиәндәр ихтилалы етәкселәренең береһе - Ҡаранай Моратов исемен бирергә булдыҡ. Төркөмөбөҙгә тағы ла бер ҡурайсы егет - Камил Фәйзуллинды, гитарасы Тимур Шәрифуллинды һәм бейеүсе ҡыҙ Наилә Мусинаны алдыҡ. Беҙҙең һәр беребеҙ төрлө ерҙә эшләй, шуға күрә кистәрен генә йыйылып, ярты төнгә тиклем репетициялар үткәрә башланыҡ. Шулай итеп, күпмелер ваҡыттан үҙебеҙҙең йыр-моңдарыбыҙҙы халыҡҡа тәҡдим иттек. Халыҡтың йылы ҡабул итеүе - беҙҙең йоҡоһоҙ үткәргән төндәребеҙҙең һөҙөмтәһе тип ысын күңелдән әйтә алам.

Беҙ оло быуын вәкилдәренең дә, йәштәрҙең дә зауығына таянып эш итергә тырышабыҙ. Шуға күрә лә беҙҙең концерттар дәртле үтә. Репертуарыбыҙ бик бай: халыҡ йырҙарынан алып, рок, поп, хатта рэп стилендәге йырҙарҙы ла башҡарабыҙ. Шулай уҡ йырҙарыбыҙҙың тематикаһы ла бай. Ә төп темабыҙ - халҡыбыҙҙың тарихына ҡағылған йырҙар. Сөнки беҙҙең маҡсатыбыҙ - үҙҙәренең телен, тарихын онотоп барған элекке аҫаба башҡорт ауылдары халҡында ата-бабаларыбыҙҙың рухын уятыу, телебеҙҙең бер телдән дә кәм булмауын иҫбатлау. Концерттан һуң халыҡ араһынан яныбыҙға килеп: "Беҙ ҙә башҡорттар ул, бары телебеҙ генә татар", -тиеүселәр мотлаҡ була. Тимәк, уйын-көлкө менән халыҡтың күңелен генә асып ҡалмай, уйланырға ла мәжбүр итәбеҙ. Үҙебеҙҙең дөрөҫ юлда икәнлегебеҙгә иманыбыҙ камил.

Киләсәктә Туймазы районы ауылдарын концерт программаһы менән урап сығырға ине. Йәй көндәре Башҡортостаныбыҙҙың башҡа төбәктәрендә лә концерттар ҡуйырға уйлайбыҙ. Ләкин әлеге көндә матди ҡыйынлыҡтар кисерәбеҙ. Үҙебеҙҙең музыка ҡоралдарыбыҙ булмағанға күрә, беҙ уларҙы арендаға алып торорға мәжбүрбеҙ. Концерттан төшкән аҡса аренда өсөн түләүҙән артмай, үҙебеҙҙән дә сығымдар талап итә. Әммә беҙ ярты юлда туҡталып ҡалмаясаҡбыҙ, Алла бирһә, яңынан-яңы үрҙәр яуларбыҙ, тип уйлайым.

**Ләйсән МУСИНА яҙып алды.**

*ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!*

## Яҡмыш

Май, тоҙ, сода һалып, кеше һанына ҡарап, ҡамыр баҫаһың да, сиселһен өсөн, ябып ҡуяһың. Ул сиселгәнсә картуфты бешереп, май, һуған, борос һалып төйәһең. Әҙер ҡамырҙы таба ҙурлығына ҡарап, йоҡа ғына итеп йәйәһең дә, төйөлгән картуфты йоҡа ғына итеп яғаһың (исеме шунан - яҡмыш) һәм 15 минутҡа мейескә ҡуяһың. Сәйгә ҡушып эсһәң, бик тәмле.

## Турамыс

Тиҙ генә бешерергә кәрәкһә, йә самалы булһа, итте ярты ҡабым ғына турап, бешерергә ҡуяһың. 15-20 минуттан туралған картуфты ҡушаһың. Ит менән картуф 15-20 минут ҡайнағас, ҡош теле итеп ваҡ ҡына иҙелгән һалманы төшөрәһең. Һуған айырым ҡайнатыла. Теләгән кеше борос та ҡуша. Ашты ҡоротлап ашайһың. Ит ваҡ турала, шуға турамыс тип атала.

## Сәүкә балалары

Һалма киҫергә ваҡыт булмаһа, итле ашҡа ла, итһеҙенә лә картуф менән бергә "сәүкә балалары" ҡушып бешерәһең. Итһеҙенә май, йомортҡа, итлеһенә һөҙлөктә генә әҙерләнгән боламыҡты ҡайнап ултырған картуфлы һурпаға ҡалаҡ менән тамыҙаһың. Тамған бер тамсы-боламыҡ йөҙә һәм бешә. Һуған айырым бешерелә. Ҡоротлап йә ҡаймаҡлап ашайһың.

## Ҡарабойҙай тәбиәһе

Беҙ үҫкәндә ҡарабойҙай оно ла һалдыралар ине. Ағас күнәктә (уны ҡыуашна ти торғайныҡ, квашня һүҙенәндер инде) баш әсетәһең, уға он һәм май ҡушып, ҡамыр ҡашығы менән ҡуйырғансы болғайһың (ҡул менән баҫмайҙар ине) ҡамыр күтәрелгәс, тәрән табаларға әлеге ҡамыр ҡашығы менән һалаһың. Тәбиә 30-35 минуттан әҙер. Йылы саҡта май, һыуығас, бал яғып сәй менән эсәһең. Аш менән дә ашайһың. Бик тәмле була.



## Сумар сәк-сәк

Хәҙер сәк-сәктең дә төрлөләре бар. Сумар сәк-сәкте әсәйем әсетеп бешерә ине. Ҡамырға май менән бал ҡушып баҫа һәм йомортҡа һарыһы ҙурлыҡтағы ҡамыр шарҙар йомарлай ҙа, талғын ғына ҡайнаған һары майҙа бешерә. Йоморо булғанға ул уны сумар тип атай ине. Сәй янына ҡуйһаң, үҙе тәмле, үҙе йәмле, хуш еҫтәр бөркөтә ине.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА-ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАРАЛҒАН ТАРЫНЫ...

## тауыҡ сүпләй

Юл насар булған һайын, күҙгә нығыраҡ саң тула.

**(Михаил Ганин).**

Һорауыңды кире ҡағыуҙарын теләмәһәң... һорама ла ҡуй.

**(Джон Драйден).**

Сәйәси кампания - ул милләттең йөрәк тибешен ауыҙ асып тыңлау сәнғәте.

**(Фил Тьюсет).**

Донъя киң тип таралма, таралған тарыны тауыҡ сүпләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.

**(Эвви Неф).**

Аҡсаның ылыҡтырғыс тәьҫиренә ҡаршы тора алмағандар бер ваҡытта ла бәхетле була алмай.

**(Демокрит).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Өс дуҫтың береһе ғәҙел, икенсеһе изгелекле, өсөнсөһө хәйләкәр була. Бына бер саҡ улар ил буйлап сәйәхәт итергә сығып китә. Йөрөй торғас, аҙашалар, аҙыҡтары ла бөтә. Бары тик бер киҫәк икмәк менән бик аҙ ғына һыуҙары ҡала. Төн етә. Дуҫтар ҡалған ризыҡты ашап тормаҫҡа, иртәнгелеккә ҡалдырырға ҡарар итә һәм ас көйө йоҡларға ята. Иртән йоҡонан торғас, дуҫтарҙың ғәҙел булғаны былай тип һүҙ башлай: "Бик ҡыҙыҡ төш күрҙем. Ҡалған ризыҡты бүлә башлағанбыҙ икән, тим. Тик нисек ғәҙел итеп бүлергә белмәйбеҙ. Шул саҡта Хоҙай Тәғәләнән тауыш ишетелә:"Тигеҙ итеп бүл!" Шулай итеп, ризыҡты тигеҙ бүлеп, үҙ өлөшөмдө ашап, тамаҡты туйҙырҙым..." "Мин дә төш күрҙем, - ти икән дуҫтарҙың изгелеклеһе. - Ризыҡтың үҙемә тейешлеһен һеҙҙең ҡайһығыҙға бирәйем икән, тип баш ватҡанда, Хоҙай Тәғәләнең тауышын ишетәм: "Үҙеңә тейешле икмәк өлөшөн дуҫтарыңа бүл, валсыҡтарын ҡоштарға бир. Һыуҙы ла дуҫтарың менән бүлеш, ҡалған тамсыларын үләнгә һип". Мин шулай иттем һәм үҙем ҡылған изгелектән туйҙым да, сарсауымды ла баҫтым..." "Ә мин шундай төш күрҙем, - ти икән хәйләкәр дуҫ. - Аслыҡтан йоҡлай алмайым икән, ти. Шул саҡта Хоҙай Тәғәлә тауышы ишетелә: " Һинең дуҫтарың тамаҡ туйҙырҙы инде, береһе - ғәҙеллеге, икенсеһе - изгелеге менән. Һин ниңә йоҡлап ятаһың? Тор һәм тоҡта ҡалған икмәкте аша, һауытта ҡалған һыуҙы эс". Мин шулай иттем дә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6066
Заказ 1934